ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

30-5 май - июнь (һабанай - һөтай)
2025
№21 (1165)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Яҙыусы һүҙе бөгөн дә кәрәк,**



тик ул үҙ һүҙен яңыса, заманса әйтергә өйрәнһен! 8-9

**Олоғая барған һайын...**

кешенең бала сағы уға яҡынаа бара



10

**Ул үҙенә һәйкәл ҡуйҙы!**



11

**Өфөбөҙ балалары...**

башҡортса һөйләшә, башҡортса аралаша



12-13

@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

***Арзанға яҙылып ҡалығыҙ! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 3 июндән 13-нә тиклемге ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2025 йылдың икенсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 872 һум 46 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ икәнен дә онотмағыҙ.***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һин китап уҡыйһыңмы? Балаларың уҡыймы?

***Айнур ҒӘЛИМЙӘНОВ, Өфө фән һәм технологиялар университетының 3-сө курс студенты:*** Мин буласаҡ физик-математик, ләкин, әсәйем әйтмешләй, күңелем менән лирикмын. Китап уҡыуға әүәҫлек миндә 3-5 йәштәрҙә башланды. Тәүҙә, әлбиттә, өс йәшемдә, мин әле уҡый белмәй инем, ләкин атайым менән әсәйем күпләп һатып алған төҫлө һүрәтле сағыу биҙәлгән балалар өсөн китаптарҙы оҙаҡ ҡарап ултырырға ярата инем. Ул саҡ миңә китаптарҙы атай-әсәйем ҡысҡырып уҡый торғайны. Шул саҡта кинәнеп тыңлаған башҡорт халыҡ әкиәттәре бөгөн дә тылсымлы кинокадрҙар һымаҡ күҙ алдымда тора. Әкиәттәр яраттым, ундағы мөғжизәле хәлдәрҙең тормошта ла барлығына ышанып үҫтем. Тора-бара үҙем уҡырға өйрәнеп, мәктәпкә барғас, өйҙәгеләрем "китап бөләһе"нә зарлана башламаһынмы! Әҙәби китаптар һиңә дәрес әҙерләргә ҡамасаулай, тип, өйгә эштән һуң ғына уҡырға тәғәйен ваҡыт билдәләп ҡуйыр булдылар. Миңә бигерәк тә фантастик әҫәрҙәр оҡшай, был жанр мине 6-7-се кластарҙа үҙенә әсир итте, сөнки тап шул саҡта мин робот техникаһы түңәрәгендә шөғөлләнә башланым.

Физик-математик һөнәрен һайлауыма роботтарҙан бигерәк, тылсымлы башҡорт халыҡ әкиәттәренә бурыслымын, тип уйлайым хәҙер. Ысынлап та, ҡанатлы Толпар тоғро дуҫы булған әкиәт батырҙарының аждаһа, дейеү, мәсекәй әбей кеүек яуыз көстәр менән көрәшеүе, Сәмреғошҡа атланған батырҙың ер өҫтөнә күтәрелеүе, Урал батырҙың үҙенә тәғәйенләнгән тере һыуҙы тирә-йүнгә бөркөп, үлемде еңеүе һәм үлемһеҙлеккә өлгәшеүе - былар бөтәһе лә кешелек донъяһының мәңгелеге, ғәҙеллеге, мөғжизәләре хаҡында һөйләп ҡалдырылған ауыҙ-тел ижады мираҫы. Ошо мираҫ ынйылары тыуғандан алып кеше күңеленең төпкөлөнә һалып ҡалдырылмай икән, тимәк, ул әҙәм әрәмгә ғүмер кисерә, донъялыҡ асылын аңлауҙан мәхрүм ителә тигән һүҙ. Был йәһәттән миндә кескәйҙән ниндәйҙер ялтырауыҡ ҡытай уйынсығына түгел, ә китапҡа, уның батыр геройҙарына ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра алған башҡорт теле уҡытыусыһы әсәйемә рәхмәтлемен. Ҡала балаһы булһам да, үҙ телемдә иркен һөйләшеүем дә шул әлеге китаптарҙан, халыҡ әкиәттәренән килә, тип уйлайым. Киләсәктә ғаилә ҡороп, балаларыбыҙ донъяға килһә, мин дә уларҙы ғаиләмдә мине тәрбиәләгәндәре кеүек белемгә, уҡырға, матурлыҡҡа, ғәҙеллеккә инандырырға, туған телебеҙҙең ҡәҙерен белергә өйрәтәсәкмен.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?



# БАЙРАМ БЕҘҘӘ, БАЙРАМ!

## Беҙ китап уҡыйбыҙ!

**Өфө "Китап-Байрам" III Халыҡ-ара китап йәрминкәһен ҡаршы алырға әҙерләнә. Ул 30, 31 майҙа һәм 1 июндә үтәсәк. Форумды ойоштороусы булып Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте сығыш яһай.**

Был ваҡиға бөтә Рәсәй һәм яҡын сит илдәрҙең китап нәшриәтселәрен, яҙыусыларын һәм китап уҡыусыларын йәлеп итеү урыны булып тора. Быйыл фестивалгә Рәсәйҙең 22 төбәгенән, 4 илдән 270 ҡатнашыусы теркәлгән, тип хәбәр итте "Китап" нәшриәтендә үткән матбуғат конференцияһында республиканың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова. "Быйыл йәрминкәгә тәүге тапҡыр Иран килә. Форумдың беренсе көнө "Батырлыҡ тураһында һүҙ" девизы аҫтында үтәсәк һәм Бөйөк Ватан һуғышына һәм Махсус хәрби операцияға арналасаҡ. Форум сиктәрендә Яҙыусылар йорто, Башҡортостан Республикаһының Милли музейында "Илемдең яҙмышында һуғыш" күргәҙмәһе асыласаҡ. Беренсе көндөң төп ваҡиғаларының береһе - Рәсәй Федерацияһы Оборона министрлығы мәҙәниәт департаментының мәҙәни программалар бүлеге етәксеһе Ольга Фаллер ҡатнашлығында Армия мәҙәниәте көндәрен презентациялау", - тип белдерҙе Әминә Ивнәй ҡыҙы.

(Дауамы 5-се биттә).

12+

***✓ Китап уҡып үҫкән балаларҙың фекерләү ҡеүәһе асыла, телмәре шымара. Әйткәндәй, китап менән дуҫ булыуы улыбыҙға башҡорт һәм рус әҙәбиәтенән олимпиадаларҙа призлы урындар алырға ярҙам итә.***

*БЫЛ АЙҘА...*

**Йыл календарында иң матур мәлдәрҙең береһе - йәмле йәйҙең тәүге айы - июнь, һөтайға аяҡ баҫтыҡ. Йәй, шағирә Гүзәл Ситдыҡова әйтмешләй, "Ожмахҡа эләккән мәл - ашъяулығы шау семәрле, сәскә-еләкле нағыш. Йәшәйек ожмах түрендә, килгәнсе көҙгө һағыш". Бынан алдағы һабанайҙағы кеүек, был айҙа ла иҫтәлекле һәм байрам көндәре байтаҡ. Шуларҙың иң ҙуры һәм нурлыһы - быйыл 6 июнгә тура килеүсе Ҡорбан ғәйете. Был көн БР Хөкүмәте ҡарары менән байрам һәм ял көнө тип иғлан ителгән. Йыл һайын 12 июндә билдәләнеүсе Рәсәй көнө РФ Хеҙмәт кодексының 112-се статьяһына ярашлы, шулай уҡ байрам һәм ял көнө булып тора. Шулай итеп, республикабыҙ халҡы 6,7,8 июнь һәм 12,13,14,15 июнь тағы ла оҙайлы ял итәсәк һәм 6 июнь менән 12 июнь сираттағы йыллыҡ түләүле отпуск көндәре иҫәбенә индерелмәйәсәк.**



# ЙӘШӘЙЕК ОЖМАХ ТҮРЕНДӘ...

## килгәнсе көҙгө һағыш

Байрамдар булып тороуы яҡшы, әлбиттә. Тимәк, ғаиләң менән бергәләп ял итергә, йәйге баҡса эштәрен башҡарыуға күберәк мөмкинлек тыуа. Тик тормош байрам һәм шатлыҡтарҙан ғына торһа, кешелек кәйеф-сафа ҡороп, уйһыҙ-ниһеҙ йәшәүсе зәғиф йәмғиәткә әйләнер ине. Шуға күрә лә беҙ тарихыбыҙ биттәрендә юйылмаҫ эҙ ҡалдырған ҡайғылы көндәрҙе лә онторға тейеш түгелбеҙ - кешелек хәтеренең ҡиммәте тап ана шунда ла бит. 1941 йылдың 22 июнендә фашистик Германия илебеҙгә баҫып инеп, Бөйөк Ватан һуғышы ғәрәсәте башланып китеүгә быйыл 84 йыл тула. Әле яңы ғына беҙ бөтөн донъя кимәлендә Бөйөк Еңеү тантанаһының 80 йыллығын билдәләгәйнек. **22 июнь** иһә хәтер һәм ҡайғы көнө булараҡ, ошо изге яуҙа ил азатлығы өсөн баштарын һалған ҡаһарман яугирҙарҙы, әсирлектә яфаланып йә булмаһа, тылда, блокадала аслыҡтан шешенеп үлгән, ғәйепһеҙ юҡ ителгән миллиондарса ҡорбандарҙы иҫкә алабыҙ, уларҙың яҡты рухтары алдында баш эйәбеҙ һәм һуғыш афәтенең ҡот осҡос эҙемтәләре башҡа ҡабатланмаһын өсөн календарь биттәрендәге ошондай ҡара датала рҙы ла хәтерҙә тотабыҙ.

Йыл календарындағы аныҡ тарихи даталар, һөнәри байрамдар рәтендә, ҡайһы саҡ йәшәйешебеҙ ҡағиҙәһе булырға тейеш хәлдә лә, ысынында буш ҡыуыҡ кеүек эшкә лә, бойомға ла ашмаҫ хыялый даталар ҙа осрап тора, һәм ул ниндәйҙер ирония, тормошобоҙ проблемаларынан көләү кеүек ҡабул ителә. Дөрөҫ, уларҙың әһәмиәте тормошобоҙҙағы теге йәки был хәл ителеүҙе көткән проблемаларҙы барлауы менән мөһим һәм... фәҡәт шул ғына. Һеҙөмтәлә "ҡыҫыр" дата - календарь битендә, ә проблема тормошобоҙҙа бер ниндәй үҙгәрешһеҙ тороп ҡала бирә. Июндәге ана шундай "байрам"дарҙың береһе - Аҙыҡ-түлек продукттары хәүефһеҙлеге көнө **(7)**. Был дата, ысынлап та, ҡулланыусынан көләү һымаҡ ҡабул ителә түгелме, сөнки бөтәбеҙгә лә мәғлүм булыуынса, бөгөн аҙыҡ-түлек сәнәғәте тармағында фальцификат "ризыҡ" сығармаған бер генә тармаҡ та юҡ. Был иң беренсе беҙҙең көндәлек тәғәмебеҙ - икмәкһөт-майҙан алып, сыр, эремсек, кондитер изделиелары, ярмалар, он, ит һәм колбаса төрҙәре, алкоголь эсемлектәр, сәй-шәкәр, кофе һәм башҡа бик күп аҙыҡ-түлек сифатына ҡағыла.

Гиппократтың "Нимә ашайһың, һин шул" тигән тапҡыр әйтеме иҫкә килеп төшә. Аҙыҡ сәнәғәтендә киң ҡолас алған химия һәм башҡа ағыулы матдәләр ҡулланыу бөгөн ниндәйҙер, йәнәһе, рөхсәт ителгән тәмләткесфәләндәр менән сағыштырғанда үлемесле хәүеф тыуҙыра - бына шуныһы ҡурҡыныс. Был кешелекте яйлап һәләкәткә килтереүгә ҡоролған. Ҡапылғара беленмәһә лә, тәүҙә кешелә төрлө сир-рәнйеүҙәр барлыҡҡа килә, унан яман шеш һәм артабан билдәле - нимә менән бөтөрө. Белгестәр фекеренсә, аҙыҡ-түлек менән кеше организмына 70 процентҡа тиклем хәүефле, зарарлы матдәләр килеп инә. 2022 йыл уҡ әле Россельхознадзор тарафынан тикшерелгән 20 658 төр малсылыҡ продукцияһының 2 648 төрө, йәғни 12,8 проценты фальцификат булып сыҡҡан. Ә

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*



## ? Һин китап уҡыйһыңмы? Балаларың уҡыймы?

***Рәлиә БИКТИМЕРОВА, Өфө районы Шамонин дөйөм урта белем биреү мәктәбе хеҙмәткәре:*** Ғаиләбеҙ менән китап уҡырға яратабыҙ. Беҙ инде ирем менән китап уҡыған быуын балалары, шуға күрә ошо сылбыр өҙөлөп ҡалмаһын өсөн балаларыбыҙҙа ла китапҡа һөйөү тәрбиәләргә тырышабыҙ. Үҙебеҙ күберәк башҡортса китаптарҙы, бигерәк тә Ноғман Мусин, Зәйнәп Биишева, Мостай Кәрим, Талха Ғиниәтуллин һәм башҡа бик күп авторҙарҙың әҫәрҙәрен уҡыйбыҙ. Ирем айырыуса хикәйәләр уҡырға әүәҫ. Өйөбөҙҙәге китап кәштәләрендә үҙебеҙҙең бала саҡтан уҡып, изге күргән "иҫке", ләкин һәр ваҡыт заманса актуаль булып ҡалған китаптар күберәк урын алып торалыр, тейем. Был китаптар кемдәрҙеңдер ялтыр тышлы һәм, бәлки, асып та ҡаралмаған модалы томдар коллекцияһына ҡарағанда йөҙ тапҡырға ҡиммәтерәк минең өсөн.

Бынан тыш, хәҙер электрон китаптарҙың барлыҡҡа килеүе лә бик уңайлы: рус һәм сит ил яҙыусылары әҫәрҙәре, китап яңылыҡтары менән танышып барыу өсөн мөмкинлек бирә. Балаларыбыҙға килгәндә, ҡыҙыбыҙ Йәнгүзәл быйыл 7-се класты, улыбыҙ Батырхан 5-сене тамамланы, улар ҙа китап яраталар. Үҙебеҙ ҙә уларҙы уҡытыу яҡлыбыҙ, сөнки китап уҡып үҫкән балаларҙың фекерләү ҡеүәһе асыла, телмәре шымара. Әйткәндәй, китап менән дуҫ булыуы улыбыҙға башҡорт һәм рус әҙәбиәтенән олимпиадаларҙа призлы урындар алырға ярҙам итә. Ҡыҙыбыҙ ҙа уңыштары менән ҡыуандырып тора.

Шуға күрә китап уҡырға кәрәк, тип инанғанбыҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, ул кешенең күңел талабына әйләнергә тейештер. Элек был ҡәҙимге күренеш була торғайны, ә бөгөн ҡулдарҙа китап урынына - телефон, тик уларҙың эйәләре онлайндан китап уҡып ултыралыр, тип уйламайым, ҡыҙғанысҡа күрә. Ә бит бөгөнгө ығы-зығылы ҡатмарлы тормошта китап кешенең иң яҡын дуҫына, аралашыу сараһына әүерелергә тейеш кеүек тә бит... Сөнки һәйбәт китап ул күңелде тынысландыра, позитивҡа көйләй, уйҙарҙы тәртипкә килтерә. Ғәҙәттә, мәктәп китапханаларында һайлау мөмкинлеге ҙур булмай, шуға күрә беҙ балаларыбыҙға китапты магазиндарҙан йөрөп-ҡарап, һатып алабыҙ. Хәҙер заказ биреп тә китап алдырыу мөмкинлеге бар бит инде. Ҡыҫҡаһы, китаптар йәшәһен ине ул, электрондары ғына түгел, элеккесә, баҫма, ҡағыҙ варианттары ла - ҡулға тотоп, уның йылыһын тойоп, һүҙ ҡеүәтенән көс алып, ыңғайға көйләнеү өсөн дә.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров уҡыусыларға Берҙәм дәүләт имтиханында уңыштар теләне. " Башҡортостандың 11-се класс уҡыусылары өсөн тарих, әҙәбиәт һәм химия фәндәренән тәүге Берҙәм дәүләт имтиханы башланды. Туғыҙынсылар өсөн һынауҙар 21 майҙа старт алды. Быйыл 16 844 кеше - Берҙәм дәүләт имтиханы, 51 812 кеше төп дәүләт имтиханы тапшыра. Уҡыусыларға уңыштар юлдаш булһын! Ата-әсәләргә иһә түҙемлек теләйем. Ә уҡытыусыларҙың изге хеҙмәте алдында баш эйәм", - тип яҙа ул социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы республиканың хәрби журналистарына дәүләт ярҙамы тураһында закон проекты өҫтөндә эшләй. Законда киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәренең ошо категорияһының, хәрби журналистика ветерандарының статусы, улар һәм уларҙың ғаиләләре өсөн социаль гарантиялар билдәләнә. Хәрби журналистика ветерандарына шифаханаларҙа дауаланыу мөмкинлеге бирелә. Ярҙам сараларының аныҡ исемлеген республика Хөкүмәте билдәләй.

✓Евросоюз сираттағы, иҫәп буйынса 17-се, санкциялар пакетын индерҙе, унда 17 физик шәхес (компания етәкселәре, сәйәсмәндәр, эшҡыуарҙар), компаниялар, предприятиелар, Рәсәй нефтен ташыған танкерҙар һәм башҡалар бар. Санкция исемлектәре Европа союзының рәсми сайтында баҫылған. Уларға Башҡортостан предприятиелары ла индерелгән. Атап әйткәндә, Өфөнөң "Гидравлика" агрегат предприятиеһы һәм РВ-1 радиоэлектрон технопаркының идара итеүсе компанияһы.

✓"Салауат Юлаев" хоккей клубы Континенталь хоккей лигаһының бронза миҙалдарын яулағандан һуң етәкселәр составын һаҡлап ҡала, тип яҙа ТАСС Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировҡа һылтанма менән. "Беҙҙе алдағы ике миҙгелдең һөҙөмтәһе бик ҡыуандырманы, ә был миҙгелдә яҡшы хоккей күрһәттеләр. Бәлки, аҙ ғына тырышлыҡ етмәгәндер, ләкин команда тап ошо етәкселек менән уңышҡа өлгәшә ала", - тип Радий Хәбировтың һүҙҙәрен килтерә ТАСС агентлығы.

✓2024 йылда Башҡортостанда 15 175 яман шеш осрағы асыҡланған, тип хәбәр итте республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин Рәсәй онкологтары съезында сығыш яһағанда. Айырыуса һөт биҙе (13 процент), простата биҙе (11 процент) һәм тире шештәре (11 процент) киң таралған. Республикала онкология сирҙәренән үлем осраҡтары 11,4 процентҡа кәмегән. "2025 йылда яңы "Оҙайлы һәм әүҙем тормош" милли проекты башланды, уның сиктәрендә 2030 йылға тиклем радиология хеҙмәтен яңыртыу планлаштырыла", - тип билдәләне Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры.

*✓ Етештереүселәр аҙыҡ-түлек технологияһын тупаҫ боҙоп, табыш артынан ҡыуыуҙары етмәгән, өҫтәүенә, сит илдәрҙә химия көсө менән үҫтерелгән йәшелсә-емештәре менән "һыйлай" беҙҙе.*



бөгөн ундай тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе йәшерелә йәки улар бөтөнләй үткәрелмәй, тигән фекер ҡала - ундай мәғлүмәттәрҙе бөгөн табып та булмай шуға ла, күрәһең. Үҙебеҙҙең етештереүселәр аҙыҡ-түлек технологияһын тупаҫ боҙоп, табыш артынан ҡыуыуҙары етмәгән, өҫтәүенә, сит илдәрҙә химия көсө менән үҫтерелгән йәшелсә-емештәре менән "һыйлай" беҙҙе. Әлеге шул ҡомһоҙ етештереүселәр күптән инде ГОСТ-тың башына етте, үҙҙәренә яраҡлы ТУ-лар (техник шарттар) уйлап сығарҙы. Етмәһә, хәҙер эшләп сығарылыусы аҙыҡ-түлектең билдәле бер техник нормаларға, йәнәһе лә, сифаты һәм хәүефһеҙлегенә, ярлаҡлы булыуын раҫлаусы аҙыҡ-түлек сифаты сертификатһыҙ ла 2010 йылда уҡ гәмәлдән сығарылды. Ләкин ул ҡулланыусылар тарафынан талап ителгән осраҡтар өсөндөр, күрәһең, интернетта етештереүсегә "тиҙ генә сертификат әҙерләп бирергә" бергә итеүсе иғландар күбәйҙе. Әлбиттә, ҙур сумма аҡса хаҡына.

Әбит был, асылда, мөһим документты Аккредитация буйынса федераль хеҙмәттән рөхсәте булған махсус үҙәктәр генә бирә ала. Ҡыҙыҡ, әбына бөгөн бөтөн ил ҡулланыусылары ризаһыҙлыҡ белдереп шаулаған пальма майына кем рөхсәт биреп ултыра икән? "Маймы был, әллә гудронмы?" тигән мәҡәләһендә юрист Ю. Степанов ошо өлкәлә кеҫә ҡалынайтыусы лоббистар ҡыҫымына ҡаршы тора алмайынса, Рәсәйгә Малайзия менән Индонезиянан арзан хаҡҡа миллионлап тонна таҙартылмаған, йәғни 7-се дәрәжә окисланған (боҙолған) пальма майы - кешеләрҙе ағыулаусы канцероген ағымының туҡталырға йыйынмауы, унан табыш алыусыларға ҡаршы бер генә дәүләт органының да көрәш алып бармауы хаҡында әрнеү менән яҙып сыҡты. Хәйер, был йәһәттән ул яңғыҙы түгел, әлбиттә, протест белдереүселәр күп, ләкин аныҡ сара күреү механизмы Хөкүмәт ҡулында икәнен барыһы ла аңлай. Дәүләт Думаһы депутаты Мария Кожевникова әйтеүенсә, хатта 2-се һанлы әсегән коэффициентлы пальма майы ла башҡа илдәрҙә фәҡәт һабын эшләү өсөн генә файҙаланыла. Ә аҙыҡ-түлек ҡулланыуына 0,5 дәрәжәһе генә рөхсәт ителергә тейеш. Ләкин беҙҙең етештереүселәр иң арзан, сөнки таҙартылмаған май менән эш итә. Ошо фальцификат майҙы ҡулланыусыларға ҡарата енәйәт яуаплылығы тураһында тәҡдим индергән Дәүләт Думаһы рәйесе В. Володиндың да тауышы үҙенән ары китмәне, дөйөм бәхәс шау-шыуында юғалып ҡалды. Сөнки, үҙҙәре ҡулланмаһа ла, балда-майҙа йөҙгән лоббистар һаман булһа пальма майының "зыянһыҙлығы" хаҡында әкиәттәрен һөйләй. Уларға ла, дәүләт контроль органдарына ла хатта билдәле журналист Аркадий Мамонтовтың Рәсәйҙә "пальма мафияһы" схемаһы хаҡындағы сығышы ла тәьҫир итә алманы. Бына шундай хәлдәр...

Июнь айында тағы ла Балаларҙы яҡлау, шулай уҡ ошо көн Бөтөн донъя ата-әсәләр, Һөт, Һыу яткылыҡтарын таҙартыу, Бөтөн донъя башҡорттарының 1-се Ҡоролтайы асылған даталар билдәләнә **(1)**, БР халыҡтары Ассамблеяһын булдырыуға - 25 йыл **(3)**, Агрессия ҡорбандары - гонаһһыҙ балалар халыҡ-ара көнө **(4)**, Эколог, Бөтөн донъя тирә-яҡ мөхит **(5)**, Ҡорбан байрам, Рус теле, Пушкин көндәре **(6)**, Бөтөн донъя аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге **(7)**, Социаль хеҙмәткәр, Енел сәнәғәт, Йорт хужабикәһе менән хужаһы халыҡ-ара **(8)**, Халыҡ-ара дуҫтар көндәре **(9)**, Рәсәй көнө. РФ суверенитеты тураһында декларация ҡабул ителгән, шулай уҡ Башҡортостандың баш ҡалаһы Өфө көндәре **(12)**, БР матбуғат һәм мәғлүмәт хеҙмәткәрҙәре, Блогер **(14)** көндәре, Медицина хеҙмәткәрҙәре, Халыҡ-ара атайҙар көндәре **(15)**, Башҡорт халҡының милли геройы, шағир һәм импровизатор, 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр восстаниеһы етәкселәренең береһе Салауат Юлаевтың тыуған көнө **(16)**, Йәйге ҡояш торошо көнө **(21)**, Хәтер һәм ҡайғы көнө - Бөйөк Ватан һуғышы башланған көн (1941), Мәскәүҙә Ҡыҙыл майҙанда Еңеү Парады үткәреүгә - 80 йыл **(24, 1945)**, Славяндарҙың дуҫлыҡ, берләшеү көнө **(25)**, Наркотик матдәләр һәм уның законһыҙ әйләнеше менән халыҡ-ара көрәш көнө **(26)**, Рәсәй йәштәре көнө **(27)**.

**Һөтәйҙә тыуғандар:**

**5 -** БАССР-ҙың халыҡ артисы, 1972-1998 йылдарҙа А.Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт дәүләт театры, М.Кәрим исемендәге БР милли йәштәр театры артисы **Рәмилә Сәлимгәрәеваға - 75 йәш** (1950).

**12 -** Башҡортостандың халыҡ артисы, 1981-2009 йылдарҙа Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы йырсыһы, Салауат Юлаев исемендәге БР дәүләт премияһы лауреаты **Ғәли Хәмзиндың тыуыуына - 75 йыл** (1950-2009).

**13 -** педагог, педагогия фәндәре кандидаты, 1998-2005 йылдарҙа Өфө ҡалаһы Мәғариф идаралығы начальнигы, 2005-2006 йылдарҙа Өфө хакимиәте башлығы урынбаҫары, Өфө күп профилле һөнәри колледж директоры, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Сынтимер Баязитовҡа - 60 йәш** (1965).

**17 -** инженер-механик, математик, Рәсәй, Башҡортостан Фәндәр академияһы академигы, физика-математика фәндәре докторы, профессор, Ленин комсомолы, СССР дәүләт, Фән, техника буйынса РФ Хөкүмәте премиялары лауреаты, IV дәрәжә "Ватан алдындағы хеҙмәттәре өсөн", Александр Невский һәм Почет ордендары кавалеры **Роберт Ниғмәтуллинға - 85 йәш** (1940).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ИКЕНСЕ ТУРҒА ӘҘЕРЛЕК



**Яңыраҡ ҡына Стамбулда булып үткән Рәсәй - Украина һөйләшеүҙәренә ҡарамаҫтан, Киев режимын ҡотороҡ биҙгәге тотто: һуңғы ваҡыт Рәсәйҙең граждандар объекттарына пилотһыҙ осоусы аппараттар менән һөжүм көсәйтелде.**

РФ Оборона министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, 25 майға ҡарай төндә Рәсәй һауа һөжүменә ҡаршы дежурлыҡ итеүсе саралар илебеҙ территориялары өҫтөнә ябырылған самолет тибындағы 110 украин дронын сәпкә алды һәм юҡ итә барҙы. Бынан алда ла, йәғни 24 май кисе Рәсәйҙең 8 төбәге буйынса ПВО көстәре дүрт сәғәт дауамында 95 дронды юҡ иткәйне. Зыян күреүҙәр, тигәндән, 19 майҙа ғына РФ Тәфтиш Комитеты рәйесе Александр Бастрыкин хәбәр итеүенсә, Украина Ҡоралды көстәре тарафынан Рәсәй төбәктәрен утҡа тотоу һөҙөмтәһендә 621 тыныс граждан һәләк булған, кәмендә 3 217 кеше йәрәхәттәр алған. РФ Президенты Владимир Путин әйтеүенсә, Украина Ҡоралды көстәре тыныс граждандар йәшәгән тораҡ пункттарҙы сәпкә ала. Был иһә дошмандың террористик асылын һәм яуызлығын фашлай. 20 майҙа РФ Президенты Владимир Путиндың Курск өлкәһенә визиты мәлендә уның вертолеты украин дрондары һөжүменең үҙәгендә ҡала, ләкин уларҙың бөтәһе лә уңышлы кире ҡағылды, тип хәбәр итә ПВО дивизияһы командиры Юрий Дашкин.

...Зеленскийҙың ике яҡлы делегация һөйләшеүҙәрен һанға һуҡмауын, һаман булһа конфликтты дауам итергә ниәтләүен уны ҡотортоусы Евросоюздағы бәғзе бер "ағайҙары"на ярарға тырышыуы тип тә яҙып сыҡтылар. Уның был ҡылығын хатта Верховный Радала ла тәнҡитләүселәр күп. Мәҫәлән, депутат Артем Дмитруктың, Зеленский Украина халҡына ҡаршы дәүләт һәм хәрби енәйәт ҡыла, тип һис ҡурҡыуһыҙ белдереүендә әсе хәҡиҡәт ята, сөнки, депутат һүҙҙәре менән әйткәндә, һәр бер дыуамал һөжүм "Украинаны катастрофаға яҡынайта". Ысынлап та, Киев режимы бер ҡулы менән туҡтауһыҙ дыуамаллыҡ ҡыла, икенсе ҡулын ҡорал, аҡса теләнселәп, Европаға һона. Ә Европаның ҡорал складтары бушаған, тип яҙа Bloomberg агентлығы, уны күпләп етештереү мөмкинлеге лә юҡ. Пентагон башлығының элекке советнигы Дуглас Макгрегор ҙа Киев режимының уғрылығын раҫлай. "Ил емертелде, - ти ул,- күпме кеше ватанын ташлап ситкә сығып китергә мәжбүр булды..."

Бындай шарттарҙа Украинаның иң яҡын союздаштары - Европа лидерҙары, атап әйткәндә, Рәсәйгә ҡарата агрессив мөнәсәбәттәге Макрон (Франция), Стармер (Британия), Мерц (Германия) һәм Балтик буйы илдәре Украинаға хәрби подразделениелар, йәнәһе лә, "тыныслыҡ көстәре" индереү хаҡындағы ниәттәренән баш тартырға уйланы, ахырыһы. Lenta.ru хәбәрсеһе Михаил Кириллов фекеренсә, бының сәбәбе - Рәсәй менән ҡапма-ҡаршылыҡты йәйелдереүҙән ҡурҡыу һәм яңы донъя һуғышына юл ҡуймау.

...Ә Дональд Трамп был ваҡытта үҙенең көндәлек эштәренә әйләнеп ҡайтты. 19 майҙа уның телефон аша Владимир Путин менән булған ике сәғәтлек һөйләшеүҙәрендә, эксперттар әйтмешләй, Трампҡа Украина конфликтының объектив сәбәптәрен һәм бында ҡарарҙы кем ҡабул итергә тейешлеген яҡшы ғына аңлата алғандар, күрәһең: Америка лидеры ошо һөйләшеүҙән һуң, конфликт яҡтары тыныслыҡ мәсьәләһен үҙ-ара хәл итергә тейеш, сөнки ҡаршылыҡ асылын улар үҙҙәре яҡшы белә, тигән фекергә килде. Ләкин Рәсәйгә ҡот осҡос күләмдә дрондар һөжүменән һуң РФ Ҡоралды көстәренең яуапһыҙ ҡалмауы һәм Украина хәрби объекттарын утҡа тотоуы АҠШ лидеры Трамптың тағы ла фекерен үҙгәртте: ул Рәсәй Президентын ғәйепләүгә күсте, ә Киевтың беҙҙең ил территорияларына йөҙҙән ашыу үлемесле шартлатҡыс аппараттар менән ябырылыуын күрмәмеш тә белмәмеш булды. Шул уҡ ваҡытта ул Евросоюзға юғары пошлиналар ниәтен 9 июлгә тиклем туҡтатып торорға хәл итте. Ни тиһәң дә, Трамп - бизнесмен, сауҙалашыу оҫтаһы, ә сәйәсәткә ҡарашы һәм ҡылыҡтары донъя аренаһында барған һәм алышынып торған "төҫтәр" артынан әйәреп йөрөй. Уны ниндәйҙер бер хөкөмдар һәм дә хакимдар күреп, ауыҙына ғына ҡарап торған Евросоюз лидерҙары хәлен шуға күрә аңларға ла була: бер сыбыҡтан ҡыуылғандар, тиер ине халыҡ әйтеме бындай осраҡта. Ә Рәсәй үҙ сәйәсәтенә тоғро һәм эҙмә-эҙлекле рәүештә Мәскәү менән Киев һөйләшеүҙәренең икенсе турына әҙерләнә, ләкин делегацияларҙың сираттағы осрашыу көнө-ваҡыты һәм урыны һуңыраҡ иғлан ителәсәк.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Салауат ҡалаһында быйыл бер юлы биш белем биреү учреждениеһы ремонтлана. Был хаҡта Башҡортостан Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Урал Килсенбаев хәбәр итте. Улар - 1-се гимназия, 4-се һәм 7-се урта мәктәптәр, 2-се кадет мәктәбе, Салауат Мәғариф һәм профессиональ технологиялар колледжы. "15 августҡа бөтә учреждениелар ҙа яңыртылған, уңайлы һәм технологик биналарҙа уҡыусыларҙы һәм студенттарҙы ҡаршы алырға тейеш", - тип һыҙыҡ өҫтөнә ала Урал Килсенбаев.

✓Ауыл хужалығына ҡағылышлы милли проект эрҙамында Башҡортостанда 333 фермер хужалығы барлыҡҡа килде, ҡулланыусылар кооперацияһына 12 мең ҡатнашыусы ҡушылды, 277 ауыл хужалығы ҡулланыусылар кооперативы дәүләт ярҙамы алды, 630-ҙан ашыу эш урыны булдырылды, 20 мең консультация хеҙмәте күрһәтелде, тип хәбәр итәләр БР Ауыл хужалығы министрлығынан. Дәүләт ярҙамы сараларына 2,3 мең берәмек техника һәм ҡоралдар, 47 мең баштан ашыу эре мөгөҙлө мал, 740-тан ашыу һарыҡ, 1,5 мең баш ат, 2 мең самаһы бал ҡорто ғаиләһе һатып алынған.

✓Башҡортостанда "Оҙайлы һәм әүҙем тормош" милли проект сиктәрендә Благовещен, Яңаул, Учалы, Әбйәлил, Аҫҡын һәм Баҡалы райондарында бер юлы алты поликлиника төҙөлә. Был хаҡта Социаль селтәрҙә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров хәбәр итте. Алты медицина учреждениеһының дүртәүһе (Аҫҡарҙа, Благовещенда, Учалыла һәм Яңаулыла) балалар һаулығы һағында торасаҡ. "Бер үк ваҡытта Өфө поликлиникаларын яңыртыу программаһын да дауам итәбеҙ", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓Республиканың һаулыҡ һаҡлау министрлығы хәбәр итеүенсә, "Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк" акцияһы барышында табиптар 35 меңдән ашыу кешене ҡабул иткән. Тикшереү һөҙөмтәләре буйынса, 541 кешелә - шәкәр кимәленең күтәрелеүе, 1493 кешелә - юғары ҡан баҫымы, 1272 кешелә артыҡ ауырлыҡ теркәлгән. Табиптар социаль әһәмиәтле ауырыуҙарға шик тыуҙырған 49 осраҡты асыҡлаған. 39 кешелә - яман шеш, 99 кешелә - шәкәр диабеты, бер кешелә туберкулез булыуы ихтимал.

✓6 июндә Нуриман районы Ҡыҙылъяр ауылының һабантуй яланында VI "Ҡәкүк сәйе -2025" республика этно-фестивале ойошторола. Фестиваль программаһында төрлө номинацияларҙа конкурстар була. Ҡунаҡтарҙы оҫталыҡ дәресе, башҡорт сәйен күрһәтеү, Гордеевтың фитоүҙәге, шулай уҡ халыҡ ижады әйберҙәре, ҡулдан эшләнгән биҙәүестәр һәм сувенирҙар күргәҙмә-һатыу көтә. Ойоштороусылар булып Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Нуриман районы хакимиәте сығыш яһай.

ҠЫҪҠАСА

# ЙӘШТӘР ҠЫҘЫҠҺЫНА

**"Патриот" паркында мәктәп уҡыусылары менән осрашыу ваҡытында Радий Хәбировтан йәштәрҙең башҡорт мәҙәниәтен үҫтереүгә нисек ярҙам итә алыуҙары тураһында һоранылар.** Радий Хәбиров: "Башҡортостан халыҡтарының телдәрен, мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, традицияларын һаҡлау - бик мөһим. Республикабыҙҙа ошо йүнәлештә махсус программалар эшләй, полилингваль гимназиялар асыла, китап нәшер итеү үҫешә. Беҙҙә Милли кейем көнө, Милли бейеү көнө кеүек байрамдар барлыҡҡа килде. Беҙ ҙур ғаиләлә йәшәйбеҙ, берберебеҙҙе ихтирам итәбеҙ, халыҡтарыбыҙҙың үҙенсәлеген һәм күп төрлө булыуын һаҡларға тейешбеҙ. Көсөбөҙ - берҙәмлектә," - тине. Республика етәксеһе йәштәр менән аралашыуҙың мөһимлеген билдәләне: "Бында хөкүмәт ағзалары, министрлыҡ етәкселәре килә, республика тормошо, бурыстары, үҫеш юлдары тураһында һөйләйбеҙ. Беҙ ысын граждан тәрбиәләргә тырышабыҙ. Йәштәребеҙ ысынлап та бик яҡшы," - тине ул.

✓ **Быйыл Башҡортостанда 14 сентябрҙә 122 һайлау кампанияһы була.** Атап әйткәндә, Белорет һәм Бөрө ҡала советтары, Өфө районының Йоматау ауыл советы депутаттарын һайлау, район советтарына 16 өҫтәмә һайлау, ҡала советтарына 5 өҫтәмә һайлау, ауыл советтары депутаттарын өҫтәмә һайлау буйынса 98 кампания ойошторола. Урындағы һайлауҙар 17 муниципалитетта ғына үткәрелмәй. Сағыштырыу өсөн, бер йыл элек республикала 218 һайлау кампанияһы уҙҙы. Был хаҡта Башҡортостандың Йәмәғәт палатаһында һайлау кампанияһы барышын күҙәтеү буйынса йәмәғәт штабы ултырышында иҫкә төшөрҙөләр, унда килеһе һайлау өсөн күҙәтеүселәр әҙерләү мәсьәләләрен тикшерҙеләр. Сит ил агенттары, экстремистар һәм террорсылар реестрына индерелгән граждандар күҙәтеүсе була алмай. Былтыр күҙәтеүселәр әҙерләү өсөн палата махсус белем биреү программаларын ғәмәлгә ашырҙы.

✓ **2025 йылдың тәүге кварталында Башҡортостанда диспансеризация үткән 124 меңдән ашыу кешенең 293-ендә түлһеҙлек, ә 22 меңгә яҡын кешелә репродуктив функция боҙолоуы табылған.** Был һандарҙы республика һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин Хөкүмәт кәңәшмәһендә әйтте. Репродуктив һаулығы менән проблемаһы булғандар махсус иҫәпкә ҡуйылған һәм уларға функцияны тергеҙеү өсөн махсус ярҙам күрһәтелә. "Халыҡ һанын тотороҡло арттырыу - социаль сәйәсәттең төп йүнәлештәренең береһе," - тине Премьер-министр Андрей Назаров. Һуңғы йылдарҙа республикала түлһеҙлекте дауалау өсөн ярҙамсы репродуктив технологиялар (ЭКО һ.б.) буйынса квоталар һаны йылдан-йыл арта, 2025 йылда уларҙың һаны 2489-ға еткән. Шулай уҡ тыуым күрһәткесен күтәреү өсөн аборт яһарға уйлаған ҡатын-ҡыҙҙар менән эш алып барыла, ауылдағы ғаиләләр медицина ярҙамына йәлеп ителә, тип өҫтәне Айрат Рәхмәтуллин.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ДӘҮЛӘТ ЯРҘАМЫ АЛЫР ӨСӨН...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров беренсе "Креатив индустриялар сәғәте" үткәрҙе.**

Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары - иҡтисади үҫеш һәм инвестиция сәйәсәте министры Рөстәм Моратов һүҙҙәренсә, республикала креатив индустриялар буйынса 14 йүнәлеш билдәләнгән. Республикала шулай уҡ 50 миллион һумлыҡ капитализация менән Креатив индустрияларға ярҙам фонды булдырыла. Рөстәм Моратов креатив индустрияларға ярҙам итеү буйынса айырым программа төҙөргә тәҡдим итте. Дәүләт ярҙамын алыу өсөн реестрҙа торорға кәрәк, унда юридик шәхестәр, эшҡыуарҙар һәм үҙмәшғүлдәр инергә мөмкин. "Республикала креатив индустриялар буйынса йүнәлештәр билдәләгәндә инвестиция сәғәттәрен нигеҙ итеп алдыҡ. Дәүләт ярҙамы саралары менән өҫтөнлөклө креатив проект статусын бирергә тәҡдим итәбеҙ", - тине Рөстәм Моратов. Ярҙам саралары сифатында Башҡортостан Башлығы гранттары, һалым каникулдары, маркетплейстар менән эшкә һәм интернетта рекламаға сығымдарҙы компенсациялау, шулай уҡ башҡа саралар тәҡдим ителә. Ошо өлкәлә эшләгән эшҡыуарҙар менән тығыҙ эш алып барыу өсөн ете пилот муниципалитеты һайланған: Өфө, Стәрлетамаҡ, Ағиҙел, Сибай ҡалалары, Бөрө, Шишмә, Белорет райондары. Шулай уҡ муниципалитет башлыҡтары ҡарамағында йәмәғәт башланғысында кәңәшсе вазифаһын булдырырға тигән тәҡдим яңғыраны.

# ХЕҘМӘТТӘШЛЕК ҺӨҘӨМТӘЛӘРЕ



**Башҡортостан халыҡ-ара партнерҙар менән иҡтисади хеҙмәттәшлекте үҫтерә. Республика Башлығы Радий Хәбиров Рәсәй Сит ил эштәре министрлығының махсус йөкләмәләр буйынса илсеһе Эдуард Малаян менән ошо эште тикшерҙе.**

Республиканың төп ҡаҙаныштары һәм тышҡы иҡтисади хеҙмәттәшлектең өҫтөнлөктәре хаҡында ул социаль селтәрҙәге сәхифәһендә яҙҙы. Башҡортостан 100-ҙән ашыу ил менән сауҙа бәйләнештәрен үҫтерә. Тәүге унау иҫәбендә - Ҡытай, Төркиә, Ҡаҙағстан, Һиндостан, Беларусь, Тунис, Үзбәкстан, Ҡырғыҙстан, Бразилия, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре. Уҙған йыл йомғаҡтары буйынса республиканың тышҡы сауҙа әйләнеше 6,4 процентҡа үҫкән. Шул уҡ ваҡытта Бразилияға экспорт - 10 тапҡырға, Һиндостанға 6 тапҡырға тиерлек арткан. Ошо уҡ осорҙа республика сит ил партнерҙары менән хеҙмәттәшлек тураһында 80-дән артығыраҡ килешеү төҙөгән. Улар иҫәбендә - Үзбәкстан һәм Беларусь менән юл карталары. Рәсәйҙең Белоруссияла, Үзбәкстанда, Ҡаҙағстанда, Төркиәлә, Ҡытайҙа, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәрендә урынлашҡан сауҙа вәкиллектәрендә Башҡортостан вәкиллектәре эшләй. "Реаль проекттар - беларус, төрөк, ҡаҙаҡ, үзбәк, башҡа партнерҙарыбыҙ менән берлектә яңы производстволар, сервис үҙәктәре асыу беҙҙең төп өҫтөнлөктәр булып ҡала. Экспортты үҫтереүгә етди иғтибар бүләбеҙ. Республикала экспортҡа ярҙам үҙәге эшләй, ул эшҡыуарҙарға тышҡы баҙарға сығырға ярҙам итә. Сит илдәрҙә бизнес-миссиялар ойоштораბыҙ, конгресс саралары үткәрәбеҙ. Мәғариф, туризм һәм башҡа өлкәләрҙә төрлө илдәр менән берлектәге проекттарҙы тормошҡа ашырабыҙ", - тип яҙҙы Радий Хәбиров.

# ҮҘГӘРЕШТӘР ИНДЕРЕЛӘ

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары киләһе пленар ултырышта Башҡортостан Республикаһы Конституцияһына үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр индерергә йыйына. Документты республика Башлығы Радий Хәбиров тәҡдим итте. Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, башҡа мәсьәләләр менән бергә республика етәксеһенең вәкәләттәре тулыландырыла һәм Ҡоролтайға закон проекттарын индерә алған субъекттар даирәһе киңәйтелә.**

"Башҡортостан Конституцияһында федераль ҡануниәт менән билдәләнгән асыҡ власть ойоштороу принциптары нығытыла. Конституция кимәлендә республика парламенты структураһы билдәләнә. Республика Хөкүмәте ҡарамағындағы мәсьәләләр исемлеге аныҡлана. Мәҫәлән, закондар сығарыу органы вәкәләттәренә өҫтәмә рәүештә республика закондарының үтәлешен контролдә тотоу, республика Премьер-министрына һәм уның урынбаҫарҙарына ышанмау йәки ышаныу мәсьәләһен хәл итеү, урындағы үҙидара органдары эшмәкәрлеге тураһында мәғлүмәтте тыңлау инә.

Дәүләт Думаһы ҡарамағындағы Йәштәр йәмәғәт палатаһына закондар сығарыу инициативаһы хоҡуғын бирергә тәҡдим ителә. Был дәүләт йәштәр сәйәсәтен камиллаштырырға, йәштәрҙең граждандыҡ әүҙемлеген арттырырға, уларҙың хоҡуҡи һәм сәйәси мәҙәниәтен формалаштырырға булышлыҡ итер ине", - тип билдәләне парламент спикеры. Закон проектын профилле парламент комитеты хуплауы билдәле. Депутаттар уның өҫтөндә эште яҙғы сессияла тамамларға ниәтләй.

# БӘЛӘБӘЙ СЫРЫ

**Бәләбәй һөт комбинатында йомшаҡ сырҙар етештереү цехын асыу тантанаһы үтте. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров предприятие коллективын ошо мөһим ваҡиға менән ҡотланы.**

"Биш йыл элек беҙ ошонда ҙур эш башлағайныҡ. Мин үҙ ваҡытында ҡарар ҡабул иткән сит ил инвесторҙарына рәхмәт белдерәм. Һуңынан бергәләп санкцияларға бәйле ҡатмарлы осор кисерҙек. Был предприятие артабан да үҫешер тип ышанам. Бөгөн мин республикабыҙҙың Ауыл хужалығы министрлығына ла рәхмәт һүҙҙәрен еткерәм. Әлбиттә, муниципаль районДың идара итеү командаһы коллективына һәм ошо предприятиеның хеҙмәткәрҙәренә ҙур рәхмәт. Илебеҙ һәм республикабыҙ Рәсәйҙә иң яҡшы сырҙар алыр, тип ышанам", - тине Радий Хәбиров.

Ул шулай уҡ республиканың дәүләт наградаларын тапшырҙы, яңы цехтың производство линиялары менән танышты һәм яңы продукцияны тәмләп ҡараны. Үҙ юлын 90 йыл элек бәләкәй генә заводтан башлаған предприятие бөгөн аҫыҡ-түлек хәүефһеҙлеген тәьмин итеүгә лайыҡлы өлөш индерә. Йыл һайын 16 мең тоннанан ашыу сыр һәм 1,5 мең тонна май - һандар үҙҙәре үк һөйләй. "Бәләбәй" ышанҫлы рәүештә Рәсәйҙең биш ярым ҡаты сыр бренды иҫәбенә инә. Предприятиеның продукцияһы илдең барлыҡ төбәктәрендә ҙур һорау менән файҙалана.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Рәсәйҙә алимент буйынса бурыслыларҙың асыҡ реестры эшләй башланы, унда 190 мең яҙма бар, тип хәбәр итә "Аңлатабыҙ.рф" телеграм-каналы. Был исемлеккә һәр кем түләмәүсе тураһында мәғлүмәт табырға мөмкин. Реестрға административ, енәйәт яуаплылығына тарттырылғандарҙың йәки 18 йәшкә тиклемге балаларҙы; бәлиғ булған, әммә эшкә яраҡһыҙ балаларҙы; эшкә яраҡһыҙ ата-әсәләрҙе ҡарау өсөн алимент буйынса бурыслыларҙың мәғлүмәттәре индерелә. Закон буйынса тәүлек эсендә түләмәүсегә уны исемлеккә индереүҙәре йәки унан алып ташлауҙары тураһында хәбәр итәләр. Хәбәр гәҙити йәки электрон почтаға килә, смс ебәрелә. Бурысты түлһынса түләгән осраҡта, мәғлүмәттәр юйыла.

✓ Йәштәр араһында Фехтование буйынса Рәсәй беренселеге Башҡортостан рапирасыларының еңеүе менән тамамланды, тип хәбәр итте республиканың вице-премьеры - спорт министры Руслан Хәбибов үҙенең телеграм-каналында. Фехтование буйынса Рәсәй йәштәр беренселеге Тула ҡалаһында үтте. Рапирала фехтование буйынса команда ярыштарында Егор Баранников, Искәндәр Булатов, Әмир Фәхретдинов һәм Дәүләт Хәйретдинов алтын миҙал алды. Икенсе урында - Санкт-Петербург спортсылары, өсөнсөлә иһә Түбәнге Новгород өлкәһе яулай.

✓ Башҡортостандан Азалия Әминева Әрмәнстанда бокс буйынса Европа беренселегендә ҡатнаша. Спортсы Рәсәй беренселегендә ышанысһы еңеп, халыҡ-ара ярыштарға юллама алды. Был турала республика Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - спорт министры Руслан Хәбибов хәбәр итте.Финалда Азалия Краснодар крайы вәкиле Анастасия Мамай менән осрашты. Алыш яҡташыбыҙ файҙаһына 5:0 иҫәбе менән тамамланды.

✓ Башҡортостан үткән дүрт ай һөҙөмтәһе буйынса сәнәғәте иң тотороҡло үҫкән төбәктәр исемлегенә инде. Был хаҡта Төбәктәр сәйәсәтен үҫтереү үҙәгенең докладында әйтелә. Алдынғылар исемлегендә Татарстан, Мәскәү ҡалаһы һәм өлкәһе, Санкт-Петербург та бар. "Башҡортостандың тотороҡло үҫешенә бер нисә нигеҙ сәбәп булып тора, шуға күрә республика тышҡы кире күренештәр тәьҫиренә бирешмәй", - ти Рәсәйҙең "АйПиЭм Консалтинг" компанияһы идарасыһы Вадим Тедеев.

✓ Башҡортостандың Йәштәр министрлығы Шәйехзада Бабич исемендәге Республика дәүләт йәштәр премияһына конкурс материалдары ҡабул итә. Ике йылға бер тапҡыр бирелә торған премияға 16-35 йәштәрҙәге яҙыусылар, шағирҙар, рәссамдар, музыканттар, артистар, архитекторҙар һәм ижади коллективтар дәғүә итә ала. Нәфис әҙәбиәт, һынлы сәнғәт, театр, музыка, эстрада, цирк сәнғәте һәм хореография, кинематография, архитектура өлкәһендә 500 000 һумлыҡ өс премия ҡаралған. Документтар 2025 йылдың 1 июленә тиклем Өфө ҡалаһы, Аксаков урамы, 2 адресы буйынса ҡабул ителә, 411-се бүлмә (БР Йәштәр министрлығы).

✓ *Китап - белем шишмәһе генә түгел, рухыбыҙҙы байытыусы, тәрбиәләүсе лә бит ул. Ҡыуаныcҡа күрә, беҙҙең ауыл халҡы телевизор ҡарап йә телефонда ғына ултырмай, уҡырға ла ярата. Тик беҙгә китаптар кәрәк!*



*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# БАЙРАМ БЕҘҘӘ, БАЙРАМ!

## Беҙ китап уҡыйбыҙ!

**(Башы 1-се биттә).**

Шулай уҡ 30 май республика театрҙарының һәм Рәсәй армияһы театрының хәрби тематикаға арналған спектаклдәрен күрһәтеү, концерт программалары ҡаралған. Яҙыусылар Олег Рой, Евгений Водолазкин, шулай уҡ шағир, Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы, лейтенант, танкыға ҡаршы взвод командиры Сергей Лобанов менән ижади осрашыуҙар була.

Икенсе көндә, 31 майҙа, байрам "Мәңгелек тураһында һүҙ" концепцияһы аҫтында дауам итәсәк һәм классик әҙәбиәткә бағышланасаҡ. Бында бөйөк ватандаштарыбыҙ: Пушкин, Есенин, Чехов, Мостай Кәрим һәм рус һәм милли әҙәбиәттең башҡа классиктары әҫәрҙәре тәҡдим ителәсәк. Рәсәйҙең халыҡ артистары Александра Захарова, Илзе Лиепа һәм Екатерина Рождественская ҡатнашлығында "Династия" спектакле күрһәтеләсәк. Популяр театр һәм кино актеры, композитор, музыкант Иван Замотаев рус классикаһы әҫәрҙәре буйынса моноспектакль тәҡдим итәсәк.

Өсөнсө көн, 1 июнь, Балаларҙы яҡлау көнө уңайынан "Киләсәк тураһында һүҙ" лозунгыһы аҫтында үтәсәк. Байрамға килеүселәр Башҡортостан Республикаһының Йыйылма балалар хоры сығышын ҡарай аласаҡ. Унда 600 бала, Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығына арнап, музыкаль әҫәрҙәрҙе форумдың төп сәхнәһендә башҡарасаҡ. Был көндө шулай уҡ балалар яҙыусылары Александр Усачев һәм Валентин Постников менән ҡыҙыҡлы осрашыуҙар була.

Өс көн дауамында әҙәбиәткә, театрға, һаулыҡ һаҡлауға, туризмға, йәштәр сәйәсәтенә һәм башҡа өлкәләргә арналған тематик майҙансыҡтар эшләйәсәк. Ғаиләләр өсөн ижади аралашыу һәм белем биреү программалары өсөн айырым урындар буласаҡ. Фестиваль сиктәрендә "БиблиоАльянс: хеҙмәттәшлектең яңы моделдәре" Төбәк китапханалары директорҙарының Бөтә Рәсәй кәңәшмәһе үтәсәк. Башҡортостанда китапхана директорҙары өсөн бындай күләмле кәңәшмә тәүгә уҙғарыла. Беларусь Республикаһынан, Мәскәүҙән, ХМАО-нан, Новосибирск, Тыва Республикаһынан, Амур өлкәһенән һәм Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән ҡунаҡтар һәм спикерҙар көтөлә.

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## ?

## Һин китап уҡыйһыңмы? Балаларың уҡыймы?

***Альбина АҠБУЛАТОВА, Баймаҡ районы Йомаш ауылы китапханаһы:*** Әле бына һеҙ шылтыратыр алдынан ғына данлыҡлы ауылдашыбыҙ, Бөйөк Ватан һуғышы яугиры, Дан ордендарының тулы кавалеры Әҙһәм Әлибаевтың тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған уҡыусылар конференцияһын тамамлап ҡына тора инек. Әҙһәм Ғәле улы 1925 йылдың 20 майында беҙҙең Йомаш ауылында тыуған. Мәктәпте тамамлап, 1943 йылда Темәс педучилищеһында уҡып йөрөгән еренән 18 йәшендә генә үҙе теләп һуғышҡа китә. Сталинградтан башлап, Берлинғаса барып етә, ауыр ярална. Һуғыштан ҡайтҡас, уҡытыусы, мәктәп директоры булып эшләй. Ҡыҙғанысҡа, һуғышта алған ауыр яраларҙан һәм контузиянан мантый алмай, 1951 йылда 26 йәшендә генә донъя ҡуя. Әҙһәм Әлибаев үҙенең һуғыш юлдары хаҡында яҙып ҡалдырған көндәлектәре Мәскәүҙә "Комсомолдар көндәлектәре һәм хаттары" тигән йыйынтыҡта ике тапҡыр баҫылып сыға. Китап уҡыусылар, айырыуса мәктәп балалары ҡаһарман ауылдашыбыҙ хаҡында бик күп мәғлүмәттәр менән таныште, уның яу юлдары хаҡында иҫтәлектәренән өҙөктәр тыңланы. Бындай саралар беҙҙең китапханала йыш ойошторола, китап һөйөүселәребеҙ унда ихлас ҡатнаша.

Ауылыбыҙҙа гәзит-журналдар һәм китап менән дуҫ, донъяға әүҙем ҡарашлы, матур күңелле кешеләр байтаҡ. Мәҫәлән, иң ихлас уҡыусыларымдың береһе Рәмилә апай Әбүбәкированы көн һайын тиерлек китапханала күрергә була. Иртәнге сәғәт 11-ҙәрҙә килеп ултырып, тәүҙә гәзит-журналдар ҡарап сыға, унан яратҡан китаптарын алып уҡый. Китап уҡырға әүәҫ тағы бер уҡыусыбыҙ - Закир ағай Түвәнәевты инде һәүәҫкәр тарихсыбыҙ тип әйтергә лә була, сөнки китапханалағы бөтөн тиерлек тарихи әҫәрҙәрҙе уҡып сыҡҡан кеше ул. Һуғыш хаҡында документаль очерктар һәм мемуарҙар - уның яратҡан жанры. Ул үҙе уҡыу менән генә сикләнмәй, ана шул китаптарҙың йөкмәткеһен тасуирлап һөйләргә ярата: тарихыбыҙҙы башҡалар ҙа белһен, уҡыһын, тип тырышыуы. Сөнки бөгөн бит йәштәр илебеҙ тарихы, шулай уҡ башҡорт халҡының үткәне менән әллә ни ҡыҙыҡһынып бармай. Әүҙем китап уҡыусыбыҙ Миңлебикә инәй Янбаеваны ла билдәләп китер инем. Беренсенән, ул өйөнә бик күп гәзит-журналдар алдырып уҡый. Ә инде китаптарҙы беҙҙән килеп ала. Тағы ла китап һөйөүселәрҙән Менәүәрә Раймәнова, Ләйлә Түвәнәева, Миңнур Ҡурмашева, Файза Фәтҡуллина, Миңнур Янбаева һәм башҡа бик күптәрҙе өлгө итеп килтерергә була. Мин берәй эш менән районға китһәм, улар ҡайтҡанымды көтөп торалар: берәй яңы китап алып ҡайтманыммы тип белешә һалалар.

Әйткәндәй, ауыл китапханаларын яңы сыҡҡан әҙәбиәт менән тәьмин итеү мәсьәләһе бик насар тора, тип әйтер инем. Беҙгә, ауыл уҡыусыһына, бөтөнләй иғтибар юҡ. Әле мин телгә алып киткән китап һөйөүселәребеҙ яңы китаптар һорап йыш мөрәжәғәт итә, хатта мине әрләп тә алалар. Ҡайһы саҡ үҙ аҡсама булһа ла яңы сыҡҡан берәй китапты һатып алып ҡайтһам, уны ҡулдан-ҡулға йөрөтөп уҡыйҙар туҙып бөтә, ә мин ҡыуанам: уҡыһындар ҡына. Китап - белем шишмәһе генә түгел, рухыбыҙҙы байытыусы, тәрбиәләүсе лә бит ул. Яңыраҡ яҡташ яҙыусыбыҙ Зөлфирә Ҡаҙаҡбаеваның китабы менән дә шулай булды. Ҡыуаныcҡа күрә, беҙҙең ауыл халҡы телевизор ҡарап йә телефонда ғына ултырмай, уҡырға ла ярата. Тик беҙгә китаптар кәрәк! **Ошо йәһәттән "Атайсал" республика проекты әүҙемселәренә өндәшкем килә: бик күп яҡшы, изге эштәр башҡарыла, тик шул уҡ ваҡытта яҡташтарығыҙҙҙың рухи ихтыяжын хәстәрләп, уларҙы гәзит-журналдар, китаптар менән тәьмин итеүҙе лә ойошторһағыҙ ине.**

*ҠЫҪҠАСА*

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан бик күп арҙаҡлы шәхестәребеҙ бар. Бөгөн балалар, йәштәр улар хаҡында бигүк хәбәрҙар түгел. Башҡорт мәктәбендә фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһендәр әйҙә.**

## Арыҫланов Ғәфиәтулла Шаһимәрҙән улы

Ул башҡорттарҙан тәүгеләрҙән булып Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була. Танк полкы командиры урынбаҫары, гвардия подполковнигы. Ғәфиәтулла Шаһимәрҙән улы Ырымбур губернаһының 1-се Кинйәабыҙ ауылында 1915 йылдың 20 сентябрендә крәҫтиән ғаиләһендә тыуған (хәҙер Көйөргәҙе районының 2-се Кинйәабыҙ ауылы). 1772-1774 йылдарҙағы Крәҫтиән һуғышында баш күтәреүселәрҙең абруйлы башлығы булған Кинйә Арыҫланов нәҫеленән.

Мәктәптән һуң Стәрлетамаҡ нефть техникумында уҡый, уны 1937 йылда тамамлай. Шул уҡ йылда Көйөргәҙе район военкоматы уны Ҡыҙыл Армия сафына ала. 1939 йылда Көнбайыш Украинала хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнаша. 1939 йылдың декабренән 1940 йылдың мартына тиклем Төньяҡ Көнбайыш фронтында хеҙмәт итә, 1939-1940 йылдарҙағы совет-фин һуғышында ҡатнаша. Маршал Семен Тимошенко ғәскәрҙәре 1940 йылдың 21 февралендә финдәрҙең үтеп сыҡҡыһыҙ тип баһаланған Маннергейм линияһын 12 саҡрым арауыҡта штрумлай һәм уңышҡа өлгәшә. Штурмда Ғәфиәтулла Арыҫланов взводы ла ҡатнаша. 24 февралдә ул фин дзотын юҡ итә. Взвод командирының танкы, тағы ла бер танк, дошман снарядтары тейеп, туҡтап ҡала. Арыҫланов дошман уты аҫтында яраланған 4 танкисты яу яланынан алып сыға. Башҡорт танкисы 1940 йылдың 24 февралендә Кууста ҡалҡыулығы (Карелия) янындағы һуғышта күрһәткән батырлығы өсөн Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була.

1941 йылда В. И. Ленин исемендәге Ульяновск Ҡыҙыл Байраҡлы танк училищеһын тамамлай. 1941-1945 йылдарҙа Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша. 1941 йылдың 2 авгусынан - Чкалов танк училищеһы курсанттары взводы, һуңынан рота командиры вазифаларын үтәй. 1943 йылдан башлап Көньяҡ Көнбайыш, Воронеж, Үҙәк, 2-се һәм 3-сө Украина фронттарында танк батальоны командиры, танк полкы командиры урынбаҫары.

Курск, Орёл, Харьков, Смоленск, Дебрецен (Венгрия) ҡалаларын азат итеүҙә ҡатнаша.

1945 йылдың 5 ғинуарында Будапешт ҡалаһы өсөн барған алышта батырҙарса һәләк була. Сербияның Сомбор ҡалаһында ерләнгән.

Наградалары:

"Алтын Йондоҙ" миҙалы (07.04.1940), Ленин ордены (07.04.1940), 1-се дәрәжә Ватан һуғышы ордены (22.01.1945), 1-се дәрәжә Ватан һуғышы ордены (23.02.1945), боевой миҙалдар. Тыуған ауылы 2-се Кинйәабыҙҙың бер урамына Ғәфиәт Арыҫланов исеме бирелгән, мемориаль стела ҡуйылған. 2010 йылда һуғыш йылдарында Чкалов танк училищеһы урынлашҡан Ырымбур дәүләт аграр университеты бинаһында Геройҙың барельефы асыла. 2017 йылда район үҙәге Ермолаево ауылында Батырҙар скверында уға һәйкәл ҡуйыла.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓31 майҙа, шәмбе көнө, Өфөнөң Һупайлы биҫтәһендә Маршал Жуков урамында - Баязит Бикбай урамынан Академик Королев урамына тиклемге участкала, Академик Королев урамында - Маршал Жуков урамынан Өфө йылғаһы яр буйына тиклемге участкала, Академик Королев урамында Паром урамына тиклемге яр буйында ваҡытлыса сикләүҙәр индерелә. Сикләүҙәр йүгереү буйынса "Йәшел марафон" хәйриә ярышы ваҡытында иртәнге сәғәт 8-ҙән киске 6-ға тиклем дауам итәсәк.

✓Башҡортостан Йәмәғәт палатаһы 28 апрелдән 20 майға тиклем һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балаларҙың ата-әсәһе менән ойошторған бәйләнештә 880 респондент ҡатнашҡан. Асыҡланыуынса, быйыл ярҙамға мохтаж балаларҙың 22 проценты реабилитациялау сертификаты алған, 23 проценты үҙ йәки республика хәйриә фонды иҫәбенә һауыҡтырын нығытҡан, 9 проценты, үҙ аҡсаһын тотоноп, йәки хәйриә ярҙамы менән республиканан ситтә реабилитациялау үткән.

✓5-6 июндә Өфөләге "Торатау" конгресс-холында "Ҡатын-ҡыҙ бәхете биләмәһе" Асыҡ Академияһы ойошторола. Сара бишенсе тапҡыр Рәсәй кимәлендә уҙғарыла. Ҡунаҡтар араһында психология докторы Виктория Шиманская; Рәсәй Федерацияһының халыҡ артисы Анита Цой; Рәсәй телевидениеһының алып барыусыһы, тележурналист, уҡытыусы Һәм йәмәғәт эшмәкәре Арина Шарапова һәм башҡалар бар

✓Өфөнөң Совет районы суды законһыҙ миграция ойоштороуҙа ғәйепләнгән Өфө дәүләт нефть техник университеты проректорын бер ай ҙа 23 көнгә, йәғни 14 июлгә тиклем, Тәфтиш изоляторына япты, тип хәбәр итә Башҡортостан судтарының берләшкән матбуғат хеҙмәте. Проректор сит ил абитуриенттарына дәртләндереү түләүҙәре алыу өсөн Төркмәнстандан 19 кешегә законһыҙ рәүештә университетҡа инергә ярҙам иткән. Һөҙөмтәлә сит ил граждандарының Рәсәй территорияһына законһыҙ инеүе һәм йәшәүе өсөн шарттар булдырылған, тип иҫәпләй тәфтишселәр.

✓Өфө ҡалаһында башҡорт телендә китаптар уҡыу марафоны еңеүселәре тәбрикләнде. Сара ойоштороусылары - Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү ойошмаһы, "Мираҫ" йәштәр башланғыстарын күтәреү фонды. Шарттар буйынса, ҡатнашыусылар тәҡдим ителгән исемлектәге китаптарҙы уҡып сығырға һәм социаль селтәрҙәрҙә был хаҡта һөйләргә тейеш ине. Ҡатнашыусылар исемлектәге китаптар буйынса төҙөлгән тест һорауҙарына яуап бирҙе. 15 еңеүсе ике тур һөҙөмтәләре буйынса билдәләнде.

**“БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.**

✓ *Беҙҙә балалар тәрбиәләүгә ярҙам итеүсе уйынсыҡтар әҙ, сөнки балалар һәм йәштәр менән бәйле был өлкәләрҙең барыһы ла идеологик ҡаршылыҡ өлкәһе булып тороуы бер кемгә лә сер түгел.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Кәкүк, какүк**

**(Обыкновенная кукушка)**



Кәкүк кеүектәр төркөмөнә ҡараған был ҡоштарҙың ҡойроҡтары ла, ҡанаттары ла киң һәм оҙон. Тәпәйҙәрендәге ике бармағы алға ҡарап тора (йәғни, тумырҡалар кеүек ағасҡа йәбешеп тора ала торған аяҡлы төркөм). Рәсәйҙә осраған төрҙәре йөнтәҫ ҡарышлауыҡтар менән туҡлана һәм бындай ағыулы аҙыҡ бәпкәләр ашатыу өсөн яраҡлы түгел. Бына шуның өсөн дә кәкүк йомортҡаһын сит ояға һала. Америка төрөнә ҡараған кәкүк үҙ ояһында үҙ балаһын үҙе тәрбиәләй. Кәкүк күгәрсендән ваҡ. Ата ҡош ҡара күк, түше, ҡорһағы ҡара буйлы һыҙыҡ төшкән аҡ төҫтә. Ҡойроғоноң осо аҡ. Инә ҡоштоң төҫө лә ошондай уҡ, тик уның боғағы һәм тамағы ерән, арҡаһының өҫкө өлөшө лә буйлы һыҙыҡтар менән биҙәлгән. Ҡайһы берҙәре тулыһынса ерән була. Аяҡтары һары. Миҙгелгә ҡарап төҫөн үҙгәртмәй. Осоп барған кәкүк ҡарсығаға оҡшаған.

Ата кәкүк беҙ ишетеп өйрәнгән, ике ижектән торған "һүҙ"ҙе ҡабатлай: "кә-күк", инә ҡош иһә сағыу итеп, "кли-кли-кли" тип һайрай. Тундра, сүллектәрҙән башҡа, бөтөн ерҙә лә бар. Көньяҡ Уралда ла ғәҙәти ҡош.

Апрель уртаһы-май башында осоп ҡайта, ата ҡош шунда уҡ тиерлек "кә-күк" тип саҡыра ла башлай. Парлашмайҙар. Инә ҡош йомортҡаһын сит ояға һалғас, унда хужа булған ҡоштоң бер, йә булмаһа барлыҡ йомортҡаһын да ашап китә. Билдәле булыуынса, кәкүк йомортҡаһын 150 төр ҡоштан баҫтыра ала, беҙҙең төбәктә бер нисә тиҫтә ҡош ошондай яҙмышҡа дусар була, йышыраҡ аҡ сәпсек, ҡыҙылғойроҡ, һандуғас, шиҡылдаҡ йәки һылыу һандуғас, килейектәр, ҡурҙайҙар, шаҡылдаҡтар һ.б. Әйтергә кәрәк, кәкүк йомортҡаһының төҫө менән үҙенә яҡын булған ҡошто һайлай. Ҡайһы саҡта тура килтерә алмаһа, башҡа ояға һалып та китә. Ә йомортҡаһының төҫө төрлө-төрлө: аҡһыл зәңгәрҙән алып аҡ төҫкә тиклем, хатта йәшкелт булыуы ла ихтимал. Төҫө йәһәтенән нык айырылып торған йомортҡаны сит ҡош ҡабул итмәй соҡоп һытыуы, йәки ояһын ташлап китеү осрағы ла булып тора.

Кәкүктең балаһы 12-13 көндә сыға. Был ваҡытта уның йөнө бөтөнләй булмай. Ул бер нисә сәғәттән оялағы ҡалған йомортҡаларҙы этеп төшөрә һәм яңғыҙы ғына ҡала. Уны "һыйындырған" инә менән ата ҡош 3 аҙна буйына ризыҡ ташып ашата, һуңынан оса башлағас та 2-3 аҙна уларҙың ҡарамағында була һәм нимә алып киләләр, шуны ашай. Ғәҙәттә, төрлө бөжәктәр менән туҡлана. Өлкәнәйә килә кәкүк балаһы турғай йомортҡаларын һытып эсә, улырҙың бәпкәләрен урлап ашай, вағыраҡ сысҡандарҙы тота. Шулай итеп ул оя паразиты ғына түгел, йыртҡыс та.

Июль урталарында оло ҡоштар йылы яҡҡа оса башлай, йәштәре көҙгә ҡала. Яңғыҙ осалар. Көндөҙ ҙә, төнөн дә оса ала. Африкала ҡышлай.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Ильяс АЛЛАБИРҘИН, хеҙмәт ветераны, Өфө ҡалаһы:*** Мин - китап тәрбиәһе алып үҫкән быуын вәкиле. Бәхеткәме, ҡыҙғаныҫҡамы - беҙҙең заманда айфон-смартфон түгел, хатта ҡала-ара стационар телефон аппараттары ла һәр өйҙә булманы. Фатирыңа ҡала телефоны ҡуйҙырыу өсөн йә берәй түрә, йә бик кәрәкле һөнәр эйәһе йә инвалид булыу шарт ине. Ни өсөн шулай тим: бөгөн ҡасандыр иң күп гәзит-китап уҡыусылар иле тип йөрөтөлгән ватаныбыҙҙа ваҡытлы матбуғат ҡына түгел, хатта китап уҡыуҙан да ваз кисте халыҡ.

Мин шулай уйлаһам да, былтыр Тверь өлкәһе мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре менән осрашыуында РФ Президенты Владимир Путин әйтеүенсә, "Бөгөнгө Рәсәй граждандары күберәк уҡый башланы. Халыҡ-ара ойошмалар тикшеренеүҙәре буйынса илебеҙ граждандары уҡыуға ваҡыттарын бүлеү иҫәбе буйынса донъяла икенсе урында" икән. Һүҙ ыңғайы шуны ла әйтеү кәрәк: китап уҡыу буйынса беренсе урында Ҡытай булып сыҡһа, Испания - өсөнсө урында. Махсус тикшеренеүҙәргә таянып һөйләүсе Президенттың фекере дөрөҫтөр, әлбиттә. Сөнки мин бит үҙем йәшәгән ҡала, дуҫтар, таныштар, китапханалар мөхитенән сығып фекер йөрөтәм. Ә бит бөгөнгө мәғлүмәт ташҡыны шарттарында нимәләр уҡымайынса, бер ни менән ҡыҙыҡһынмайынса йәшәүҙе күҙ алдына ла килтереп булмай. Дөрөҫ, бөгөн ҡулға китап йә гәзит урынына әлеге лә баяғы телефон тотоп уҡыйҙар, сөнки электрон китаптар барлыҡҡа килде. Был, бер яҡтан, китап булып баҫылып өлгөрмәгән йә иһә тиҙ генә табып булмаған берәй әҙәбиәтте уҡырға мөмкинлек биреүе менән ҡиммәт. Мин үҙем дә былтыр "Стругацкийҙарһыҙ донъя" тигән хикәйәләр йыйынтығын уҡый башлағайным да, электрон экранды яйһыҙ күреп, китаптың үҙен һатып алырға булдым.

## Һин китап уҡыйһыңмы? Балаларың уҡыймы?



Ошо ай аҙағында Өфөлә үткәреләсәк Халыҡ-ара йәрминкәлә яңы китаптар менән танышыуҙы түҙемһеҙләнеп көтөп йөрөйөм. Былтырғы йәрминкәгә ейәнем менән ейәнсәремде лә алып барғайным. Улар үҙҙәре өсөн тотош бер мөғжизә - китап донъяһы асты бында. Бала саҡтан китап "ене" ҡағылғанлыҡтан, минең өй тулы китап, шкафҡа һыймағандарын үҙем стенаға беркетеп эшләгән кәштәгә теҙгәнмен. Балаларым шул китаптар менән дуҫлашып үҫте, тиергә лә була. Бөтәһен дә уҡып сыға алмаһалар ҙа, үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған темаға һәр ваҡыт китап табыла ине был кәштәләрҙә. Ейән-ейәнсәрҙәр ҙә беҙгә килгән һайын, үҙҙәре үҫә барған һайын, ошо китап шкафы янында оҙағыраҡ туҡтала барҙы. Әйткәндәй, унда элекке совет балалар яҙыусылары Сергей Михалков, Самуил Маршак, Корней Чуковский, Николай Носовтар менән бергә башҡорт яҙыусылары Зәйнәп Биишева, Мостай Кәрим, Әнүәр Бикчәнтәев, Фәрит Иҫәнғолов, шулай уҡ бөгөнгө яҙыусыларҙың әҫәрҙәре бик күп. Балалар, унан һуң ейәндәр бәләкәй саҡта уларға ҡатыным менән алмашлап ҡысҡырып китап уҡыр булдыҡ, үҫә килә, улар үҙаллы уҡый башланы. Улар бигерәк тә З.Биишеваның "Дуҫ булайыҡ", М.Кәримдең "Өс таған", "Беҙҙең өйҙөң йәме" әҫәрҙәрен яраттылар. Ошо әйткән һуңғы ике әҫәр буйынса талантлы режиссер Айнур Асҡаровтың фильмдарын да бергәләп йыйылып, ҡыҙыҡһынып ҡараныҡ.

Шуны әйтергә теләйем: өлкәнәйә килә, күңел документаль әҫәрҙәргә тартыла икән ул, сөнки был тарихи китаптарҙа уйлап сығарылған яҙыусы фантазияһы юҡ, уларҙа - тормош хәҡиҡәте һәм йыш ҡына күпселеккә билдәле булмаған мәғлүмәттәр теркәп ҡалдырылған. Әлеге ваҡытта мин бөйөк полководец, Советтар Союзы Маршалы, дүрт тапҡыр Советтар Союзы Геройы, ике "Еңеү" ордены кавалеры Георгий Жуковтың "Иҫтәлектәр һәм уйланыуҙар" китабының ике томлығын ҡайтанан уҡыйым. Икенсе бер мәшһүр Маршал А.Василевский әйтеп ҡалдырғанса, был китаптың уңышы үҙенең илһөйәрлеге менән айырылып тора, тарихи ваҡиғаларҙы бөтөн киңлегендә һәм объективлығында сағылдырыуы менән ҡиммәт. Жуковтың мемуарҙары теге осорҙа 30 илдә 18 телдә 7 млн тираж менән баҫылып сыға һәм Штутгартта нәшер ителгән баҫмаһы тышына немец телендә: "Эпоханың бөйөк документтарының береһе" тип яҙылған. Илһөйәрлек өлгөһө тип танылған ошо документаль әҫәрҙе бөгөн мәктәптәрҙә тарих дәрестәрендә хрестоматия итеп файҙаланырға ине ул...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА**
**яҙып алды.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БАЙРАМ БЕҘҘӘ, БАЙРАМ!

## Әйҙә, уйнарға!



**Өфөлә икенсе тапҡыр - 5 июндән 8 июнгә тиклем - үтәсәк "Айда/Әйҙә уйнарға" уйынсыҡтар һәм уйындар фестивалендә 150 ватан етештереүсеһе үҙ продукцияһын тәҡдим итәсәк. Сараның төп маҡсаты - Рәсәй етештереүселәренең уйын һәм уйынсыҡтар ассортиментын, уҡытыу сараларын, медиабрендтарҙы, рухи-әхлаҡи һәм традицион ҡиммәттәрҙе формалаштырыусы ватан геройҙары һәм әкиәт персонаждарының ретроспективаларын күрһәтеү.**

"Китап" нәшриәтендә үткән матбуғат конференцияһында БР Сәнәғәт, энергетика һәм инновациялар министрлығының бүлек начальнигы Ольга Трофимова билдәләүенсә, форумға килергә теләүсе етештереүселәр һаны уҙған йыл менән сағыштырғанда артҡан. Бынан тыш, байрамда 200-гә яҡын һөнәрсе үҙҙәренең эксклюзив уйынсыҡтарын тәҡдим итәсәк. Дүрт көн дауамында Совет майҙанында Рәсәй етештереүселәренең уйынсыҡтар күргәҙмәһе, балаларҙың иң яҡшы уйын тәжрибәләрен күрһәтеү, уйынсыҡтарҙың тест-драйвы ойоштороласаҡ.

Фестивалдең ҡунаҡтарын һәм ҡатнашыусыларын тематик конкурстар һәм оҫталыҡ дәрестәре, спорт ярыштары, популяр Рәсәй артистарының сығыштары көтә. Көн һайын республиканың алдынғы театрҙарының иң яҡшы балалар спектаклдәрен күрһәтеү ойоштороласаҡ. Интерактив һәм күргәҙмә майҙансыҡтары эше планлаштырыла, өҫтәл уйындары буйынса спорт ярыштары үтәсәк. Быйылғы фестивалдең яңылығы булып компьютер уйындары экспозицияһын үткәреү тора.

- "Айда/Әйҙә уйнайыҡ" фестивален үткәреүҙең мәғәнәһе уйынсыҡтарыбыҙҙың әҙ булыуына ҡайтып ҡалмай. Беҙҙә балалар тәрбиәләүгә ярҙам итеүсе уйынсыҡтар әҙ, сөнки балалар һәм йәштәр менән бәйле был өлкәләрҙең барыһы ла идеологик ҡаршылыҡ өлкәһе булып тороуы бер кемгә лә сер түгел. Беҙгә сифатлы, яҡшы уйынсыҡтар кәрәк, улар балаларҙа матурлыҡ тойғоһо, гармония һәм тормошҡа, тирә-яҡ мөхиткә дөрөҫ ыңғай ҡараш тәрбиәләү мөмкинлеген бирә. Был ике форумдың да - "Әйҙә, уйнарға" һәм "Китап-Байрам"дың ҙур миссияһы, - тине республиканың Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы етәксеһе урынбаҫары Марат Ғәзизов.

**✓ Ҙур түрә һәм хәлле башҡорт дворян ғаиләләре XIX быуатта, XX быуат башында затлы урыҫ дворяндары һәм эре помещиктары менән ярышырлыҡ күп ергә һәм мөлкәткә эйә булғандар.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**А.П. Безак**

**(1860 - 1864 йылдарҙа губернатор булған)**

Безактың идара итеүенең һуңғы йылында казак ғаиләләренән махсус клуб булдырыла, унда урта сословие кешеләре лә йөрөй ала. Бейеү кисәләренә бик күп публика йөрөй, кисә бинаһында ныҡ тығыҙ була. Клуб уставына ярашлы, бында йөрөүсе ҡатын-ҡыҙҙарҙың айырыуса матур кейем менән килеүе талап ителмәй, дамалар ҡәҙимге күлдәктәрҙә һәм ябай прическа менән килә. Ошо клуб өс йылдан да артыҡ эшләмәй. Крыжановский, бында ниндәйҙе бер сепаратизм һыҙаттарын күрә һәм клубты яба.

Безак үҙе лә тантаналы көндәрҙә мәжлестәр һәм балдар уҙғара, уларға барса сословиеларға ҡараған кешеләр саҡырыла. Ҡыш айҙарында аҙнаға бер тапҡыр бейеү кисәләре ойошторолa, әммә Катенин ваҡытындағы шарттар инҡар ителә: буфетта шарап һатылмай; шулай ҙа еләк-емеш һәм төрлө тәм-том таратыла, хатта арбуз да була.

Алдараҡ хәрби министр Милютиндың Безакҡа башҡорттар хаҡында яңы положение әҙерләргә ҡушыуы хаҡында әйтеп үткәйнем. Унда уларҙың хәҙерге торошон һәм дөйөм дәүләт мәнфәғәттәрен сағылдырыу талап ителә. Ошо маҡсатта ойошторолған кәңәшмәлә башҡорттарға ҡарата ла 1861 йылда крәҫтиәндәр өсөн ҡабул ителгән положениены тулыһынса ҡулланырға, тик башҡорттарҙың аҫабалыҡ хоҡуғын һаҡлау һәм ошоға ярашлы үҙгәрештәр индереү күҙаллана. Ғәскәр командующийы вазифаһы урынына үҙәк коллегиаль учреждение булдырыу һәм урындарҙа идара итеүселәр өсөн элекке кантон начальниктары атамаһын ҡалдырыу ҙа ҡарала, былар халыҡты хәүефләндермәү маҡсатында эшләнә. Ошо тәҡдимдәр нигеҙендә положениены төҙөү генерал Тетеревниковҡа йөкмәтелә, ә ул был эште үҙенең канцелярияһы башлығы Долинскийға ҡуша. Һуңғыһы әҙерләгән проект крәҫтиәндәр тураһындағы положениеның бер күсермәһе кеүегәрәк була, бында кантон начальниктарына мировой посредниктарҙың бурыстарын үтәү хаҡында ла әйтелә. Үҙәк идаралыҡ дәүләт милеге палаталары эшмәкәрлегенә оҡшатып ҡоролорға тейеш була.

Башҡорттар тураһындағы положение проекты Безак рәйеслек иткән айырым комитетта тикшерелә һәм, бигүк мөһим булмаған үҙгәрештәр, өҫтәмәләр индергәндән һуң, хәрби министрға тапшырыла.

Проект һығымта яһатыу өсөн министерлыҡтан батша ғали йәнәптәренең шәхси канцелярияһының икенсе бүлеге баш идараһына бирелә. Ул үҙенең төҙәтмәләрен индерә, проект ике өлөшкә бүленә: тәүге яртыһы идаралыҡҡа ҡарай, йәғни халыҡ киң үҙидара хоҡуғына эйә була, икенсеһендә - үҙәк өлөшөндә, башҡорттар менән дөйөм идара итеү эштәре ҡарала: элекке учреждениеларҙың характеры һаҡлана - үҙәк идаралыҡ бар нәмәне лә контролдә тота, хужалыҡ эштәренең файҙалы һәм килемле булыуын тикшерә һәм, һис шикһеҙ, ҡайһыларын кире ҡаға һәм йәмғиәткә үҙҙәренең эштәрен тик үҙәре теләгәнсә генә башҡарыуҙы тыя ала.

Генерал Безак был ваҡытта Петербургта була һәм батша ғали йәнәптәренә шәхси доклад менән инә, ошо проектты дәүләт советында үҙенең ҡатнашлығында ҡарарға, уны үҙгәртеү йә иһә ҡабаттан төҙөү талап ителгән хәлдә, оҙайлы ваҡыт кәрәк булғанлыҡтан, Ырымбурға кире ҡайтармайынса, был эштәрҙе ошонда уҡ башҡарырға рөхсәт һорай. Уның үтенесе кире ҡағылмай, 1863 йылдың 14 майында башҡорттар тураһындағы положение батша ғали йәнәптәре тарафынан раҫлана.

Безак май аҙағында Ырымбурға ҡайта һәм Богуславскийға һис кисекмәҫтән башҡорттарға яңы положениены индерергә һәм шундуҡ яңы вазифаларға тәғәйенләгәндә рәсми рәүештә миңә урын бирмәҫкә ҡуша.

Богуславский аптырабыраҡ китә, ул шундуҡ мине үҙенә саҡырып алды: "Әллә казак ғәскәренә юғарыраҡ вазифаға тәғәйенләүҙе көтәһеңме?" - тип һораны. Минең хәрби хеҙмәткә хоҡуғымдан мәхрүм итерлек бер ни ҙә ҡылғаным юҡ, яңы вазифаға тәғәйенләнеүемде лә көтмәйем, бында тик Безактың интригаһын һәм уның мине башҡорттар менән идарылыҡта ҡалдырырға теләмәүен генә күрәм, тип яуап ҡайтарҙым. Богуславский Безактың миңә ҡарата насар мөнәсәбәттә булыуының сәбәбен ошолай аңлатты: "Ул үҙенең кейәүе Трубецкойға урын әҙерләй, ә һеҙ юлда тораһығыҙ, ул шулай уҡ минең ярҙамсым итеп кенәз Трубецкойҙы түгел, ә һеҙҙе ҡалдырырға теләүемде лә белә, һәм мин бер нисек тә унынса эшләмәйәсәкмен".

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы бар).**

*ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!*

# БАШҠОРТ ТАРХАНДАРЫ ҺӘМ ДВОРЯНДАРЫ



Профессор Рим Янғужин башҡорт йәмғиәтенең юғары социаль ҡатламдары хаҡындағы бер мәҡәләһендә 1850 йылда башҡорттарҙан 590 дворян булған тигән һан килтерә. 1840 йылдарҙың урталарында 19 ғына башҡорт дворяны булып, дүрт-биш йыл эсендә (1850 йылда) был һандың 590-ға етеүе шик тыуҙыра. Беҙҙеңсә, 590 һанына башҡорт дворяндары ғына түгел, уның тархандары һаны ла ингәндер, моғайын. Ә бына ошонан һуң, 1851 йылдан 1865 йылға тиклем, йәғни ун биш йыл буйына бер генә башҡорт башлығы йәки затлы ғаиләһе дворян дәрәжәһе ала алмауы был шикте тағы көсәйтә. Йәғни Рәсәй хөкүмәте, уның губернаторҙары сит милләттән һәм икенсе дин вәкилдәренән дворянлыҡҡа кандидатураларҙы берәмтекләп кенә һайлап алыр булғандар. Рәсәй иле алдында күрһәткән ҙур хеҙмәттәре һәм аҡ батшаға тоғролоҡтары был һайланышта төп үлсәм (критерий) һаналған.

Рәсәйҙең башҡорттар хаҡындағы 1863 йылдың 14 май положениеһында ғына башҡорт дворяндары урыҫ дворяндары менән тиң хоҡуҡлыҡ законлаштырылған. Шәхси дворянлыҡ дәрәжәһен һәм хоҡуғын бөтә ғаиләгә, нәҫелдән нәҫелгә күсереү нығытылған. Шул йәһәттән ҡарағанда, 1897 йылғы бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәрендә Өфө губернаһында башҡорт ғаиләләре эсендә - 512 йән, Ырымбур губернаһында - 452 йән кеше дворян заты тип исемләнгән.

Ҙур түрә һәм хәлле башҡорт дворян ғаиләләре XIX быуатта, XX быуат башында затлы урыҫ дворяндары һәм эре помещиктары менән ярышырлыҡ күп ергә һәм мөлкәткә эйә булғандар. XIX быуат аҙағында башҡорт дворяндарынан Өфө губернаһында 303, Ырымбур губернаһында ла шунса эре хужалыҡ яҡшы билдәле. Бәләбәй өйәҙендә Солтановтар, Бөрө өйәҙендә Ҡотлобаевтар бик ҙур ерҙәр биләгән, ҙур байлыҡ, мөлкәттәргә хужа булған.

Нәҫелдән нәҫелгә күскән башҡорт тархандары һәм дворяндары династияһынан бик күп уҡымышлы кешеләр, дәүләт, йәмәғәт эшмәкәрҙәре, ғәскәр башлыҡтары, ғалимдар, дин әһелдәре, сәнғәт, мәҙәниәт, мәғрифәт өлкәһендә етәксе, һәләтле шәхестәр сыҡҡан. БыҒаса беҙ, ғалимдар, уларҙың нәҫел-нәсәптәрен юллап, затлы династия кешеләре икәнлеген асыҡлап ҡараманыҡ. Рухи мираҫыбыҙға, затлы нәҫелдәргә синфи күҙлектән ҡарау һәм шул нөктәнән инҡар итә килеү был эшкә ҡамасаулыҡ яһаны. Хәҙер беҙгә башҡорт тархандары, дворяндары династияларын ныҡлап өйрәнергә һәм уларҙың тыуған ил, туған халҡы алдындағы оло хеҙмәттәрен күрһәтергә бик ваҡыт.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**

**"Башҡорт халҡының рухи донъяһы" китабынан.**

**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Һунарсылар һәр көн тоҙаҡтарҙы тикшереп торған, табыш булһа, уларҙы алып, яңы тоҙаҡ ҡорғандар. Был ысул, нигеҙҙә, көҙөн ҡулланылған. Башҡорттар тоҙаҡ менән бик һирәк кенә көҙән, йомрандарҙы ла аулаған.

Башҡорттар ҡатмарлы тоҙаҡтарҙан йәнлекте үҙенең ауырлығы менән баҫыуhсы тәпеләр һәм һуғып иҫәнгерәтеүсе ҡапҡандар (тәпе, атма, һауыт) ҡулланған.

Тәпе йәки ҡамас береһе өҫтөнә икенсеһе урынлаштырылған ике бүкәндән (түмәрҙән) торған. Уның өҫтәгеһе саҡ ҡына күтәрелеп ҡуйыла, бүкән килеп эләккән йәнлекте үҙенең ауырлығы менән баҫыра. Бер үк рәүешле ҡоролма булһа ла, тәпеләрҙең сысҡан аулай торған бәләкәйҙәре лә, айыуға ҡоролған бик ҙурҙары ла була. Тәүге осраҡта тәпе ике таҡтанан тора һәм ҡаптырғыс урынына туң май алына. Икенсе осраҡта тоҙаҡ бүрәнәләрҙән эшләнә һәм ҡаптырғыс рәүешендә үлгән йәки айыу өҙгөләгән мал-тыуар тора.

Айыуға ҡоролған тоҙаҡты урынлаштырғанда ағас түшәмә эшләнә, уның өҫтөнә ҡаптырғыс менән тоташтырылған махсус ҡулайлама ярҙамында өсмөйөш формаһындағы бүрәнә ҡапҡан нығытыла. Түшәмәгә ҡаптырғыс һалына, һәм айыу аҙыҡҡа ҡағылыу менән ҡапҡан айыу өҫтөнә төшә.

Сысҡан аулау тәпеһе Башҡортостанда киң танылыу таба һәм борон уның менән сысҡан ғына түгел, башҡа ваҡ йәнлектәрҙе лә тотҡандар. Айыуға тәпе тоҙағын мин бары тик гәрәй-ҡыпсаҡтарҙа һәм кәлсертабындарҙа ғына, Урал тауының көнбайыш итәгендә, күрҙем.




Шулай уҡ башҡорттарҙың аҫ, сысҡан һәм башҡа ваҡ йәнлектәрҙе тотоу өсөн ҡоролған һуҡма тоҙаҡ та тәпе тип атала һәм ул эсе соҡоп алынған түмәрҙән - һауыттан (а) тора, уға киң ағас ҡалаҡ (б, в) беркетелә. Түмәрҙең уртаһында уйым яһала, уның эсендә аҫҡы ҡалаҡ дәүмәлендәге икенсе ҡалаҡ иркен йөрөй ала. Түмәр эсендәге тышҡы шыналар менән ҡайырып һәм тарттырып бәйләнгән тоҡан еп өҫкө ҡалаҡ өсөн пружина булып хеҙмәт итә. Өҫкө яҡҡан урынлаштырылған ҡалаҡ махсус ян (г) һәм уға бәйләнгән телле сирткес (д) ярҙамында тотоп торола (1-се һүрәт).

**(Дауамы бар).**

***✓ Һәр замандың үҙ заңы тигәндәй, уның ҡарауы, бөгөнгө заман технологиялары әҙәбиәт һөйөүселәргә "OZON", "Wildberries" һәм ЯндексМаркет кеүек маркетплейстар аша китаптарҙы заказ биреп алдырыу мөмкинлеген бирҙе.***



# ЯҘЫУСЫ ҺҮҘЕ

## тик ул үҙ һүҙен яңыса,

**30 майҙан 1 июнгә тиклем өс көн дауамында Өфөлә III Халыҡ-ара "Китап-Байрам" китап йәрминкәһе үтә. Ошо сағыу сара айҡанлы беҙ Башҡортостан "Китап" нәшриәтенең баш мөхәррире Зөлфиә Шәрифйән ҡыҙы Ҡарабаева һәм "Самрау-Медиа" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәттең генераль директоры Мансур Риф улы Ғилфанов менән әңгәмә ҡорҙоҡ. Һөйләшеү барышында, "Китап донъяһы бөгөн ни хәлдә?", "Халҡыбыҙ китап уҡыймы, китапҡа һорау бармы?" тигән һорауҙарға яуап эҙләнек.**

**Китап ул - ғәйәт ҙур төшөнсә. Халҡыбыҙ юҡҡа ғына "Китап - белем шишмәһе", "Китапһыҙ өй - тәҙрәһеҙ бүлмә", "Уҡыған ил уңыр, уҡымаған ил туҙыр", "Яҡшы китап - иң ғәҙел дуҫ" тип әйтмәйҙер. Заманында Советтар Союзы донъяла иң күп уҡыған ил булараҡ танылғайны. Хәҙер нисек? Рәсәй, Башҡортостан халҡы китап уҡыймы икән?**

**Мансур Риф улы:** Элек, Совет осоронда, китап уҡыуҙы популярлаштырыу дәүләт кимәлендә ҡуйылғайны. Ул һәр йәһәттән пропагандаланды. Миҫал өсөн Леонид Гайдайҙың "Спортлото-82" фильмын алһаҡ, унда бөтә лә китап тотоп йөрөй. Ул саҡта китап уҡыу милли идея ине, тип уйлайым. Бәлки, халыҡтың аңын биләп алыу, күңелен, иғтибарын проблемаларҙан ситкә бороу, буш ваҡытын файҙалы итеп ойоштороу ниәте менән шулай эшләнгәндер. Нисек кенә булмаһын, күп уҡыу тик файҙаға ғына һәм, ысынлап та, Совет дәүеренә был йәһәттән һоҡланырға, уны һағынып иҫкә аларға ғына ҡала. Хәҙер - интернет заманы. Кешенең ҡулынан телефон төшмәй, уҡығаны - бәләкәй генә текстар. Ҙурырағына күҙ генә һалабыҙ ҙа, үткәреп ебәрәбеҙ, ҡарап сығырға йыбанабыҙ. Күләмле әҫәрҙәр уҡыу ҙа шулай икенсе планға күсә. Моғайын, беҙ, хәҙерге 40-45 йәштәгеләр, ҡулына китап алыусы һуңғы быуындыр, тигән күңелһеҙ уйҙар ҙа килеп ҡуя ҡайһы саҡ. Йәштәрҙе китап уҡырға йәлеп итеүе бик ауыр.

**Зөлфиә Шәрифйән ҡыҙы:** Китап уҡыусылар һаны кәмей, йәштәр әҫәрҙәрҙе күберәк интернет аша уҡый, тигәнерәк һүҙҙәрҙе йыш ишетергә тура килә. Мин был фекер менән килешеп бөтмәйем. Беҙҙең нәшриәт элек районлар буйлап "автопробег"-тарға сыға торғайны. Йәғни, машина менән йөрөп, күсмә һатыуҙар ойоштора инек. Бөтә ерҙә беҙҙе көтөп алдылар. Һәр замандың үҙ заңы тигәндәй, уның ҡарауы, бөгөнгө заман технологиялары әҙәбиәт һөйөүселәргә "OZON", "Wildberries" һәм ЯндексМаркет кеүек маркетплейстар аша китаптарҙы заказ биреп алдырыу мөмкинлеген бирҙе. Ошо рәүешле беҙҙең китаптарҙы уҡыусылар даирәһе киңәйҙе. "Китап" нәшриәте сығарған баҫмалар Рәсәйҙең бөтә төбәктәрендә лә (81) тип әйтерлек һәм яҡын сит илдәрҙә таралыуы ғорурлыҡ уята. Бигерәк тә Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Үзбәкстандан әүҙем алдыралар. Ә иң күп яҙҙыртыусылар - Беларустан. Әйтәйек, 2024 йылда барлығы 5 меңдән ашыу дана китап заказ менән алдырылған. Рус телендә баҫылып сыҡҡан китаптарҙы күпкә йышыраҡ яҙҙыртып ала башланылар. Балалар өсөн баҫмаларҙың популяр булыуы киләсәктә китап уҡыусыларыбыҙҙың тағы ла артасағын күрһәтә. Стәрлетамаҡтан Оксана Сальникованың "Күңелле баҫҡыстар" тип исемләнгән инглиз, ҡытай, башҡорт, рус телдәрендә нәшер ителгән шиғырҙар йыйынтығы шунда уҡ һатылып бөттө. Ғөмүмән, китаптар һатыла, тимәк, уларҙы уҡыусылар ҙа бар. Мәшһүр классиктарыбыҙ популярлығын юғалтмай. Шулай уҡ яңы авторҙарҙы республика аудиторияһына танытыу өсөн дә эшләйбеҙ.



***Радий Фәрит улы беҙҙең дөйөм ынтылышты тормошҡа ашырҙы. Һөҙөмтәлә, ысынлап та, уникаль проект ғәмәлгә ашты. Барлыҡ нәшриәттәр ҙә Ҡыҙыл майҙанға бара алмай, ә беҙгә килеү күптәр өсөн уңайлы. Ҡатнашыусылар һаны йылдан-йыл арта. Төбәк нәшриәттәре етәкселәре киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре менән аралашҡанда, Өфө Мәскәүҙе уҙҙырҙы, тип маҡтап та ебәрҙеләр. Семинарҙар ойошторола, презентациялар үтә, китап сауҙаһы йылдам бара. Волонтерҙар бөтә ерҙә лә ярҙамға килергә әҙер тора.***

**Китапты уҡыу өсөн, уны тәүҙә сығарыу, баҫыу шарт. Республикабыҙҙа китап нәшер итеү нисек ҡуйылған?**

**Зөлфиә Шәрифйән ҡыҙы:** Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте республикабыҙҙағы дөйөм белем биреү учреждениеларын уҡытыу-методик баҫмалар менән тәьмин иткән, китапханалар фондын кәрәкле әҙәбиәт менән тулыландырған берҙәнбер дәүләт нәшриәте. Уҡыу әсбаптары дөйөм күләмдең 60 процент самаһын алып тора. Ҡалғаны - нәфис һәм ғилми-популяр әҙәбиәт, балалар әҙәбиәте, фотоальбомдар һәм башҡа продукция төрө. Дәүләт ойошмаһы булараҡ финанслау субсидия рәүешендә хөкүмәт тарафынан бүленә. Нәшриәт китаптарҙы баҫмаға әҙерләй, һуңынан улар төрлө типографияларҙа тендер конкурстары аша баҫтырыла.

**Мансур Риф улы:** Китап баҫыуҙың иң алдынғы технологиялары бөгөн ҡул көсөн минималләштерергә булышлыҡ итә. Шул уҡ Воронежды алһаҡ, ундағы полиграфия предприятиелары ағым (поточный) ысулына нигеҙләнгән ҡорамалдар менән эшләй. Флешканан йә электрон почтанан алып, китаптың электрон варианты һалынған файлды машина программаһына индерәләр ҙә кнопкаға баҫалар. Техника барлыҡ операцияларҙы ла үҙе башҡара, линия аҙағында әҙер китап каптарға төрөлгән килеш килеп сыға. Әлбиттә, был осраҡта сығымдар, тимәк, хаҡтар ҙа түбән була. Шуға ундай ойошмалар үҙҙәренә заказдарҙы күберәк йәлеп итә.

**"Китап" нәшриәтенең китап сығарыу планы нисек формалаша, ҡайһы авторҙың әҫәрен индереү тураһында ҡарар нисек ҡабул ителә?**

**Зөлфиә Шәрифйән ҡыҙы:** Ҡулъяҙмалар "Китап" нәшриәтендә ҡабул ителә. Беҙ һайлап алған әҫәрҙәр йыл да көҙ айҙарында үткән ҙур худсоветҡа сығарыла. Уның эшендә Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы, Мәҙәниәт министрлығы вәкилдәре, Яҙыусылар союзы рәйесе һәм секция етәкселәре, республика баҫмаларының баш мөхәррирҙәре - барлығы 20-нән ашыу кеше ҡатнаша. Әҙәби әҫәрҙәр сығарыу буйынса йыллыҡ план ошо рәүешле әҙерләнә. Дәреслектәрҙең исемлеген Мәғариф министрлығы әҙерләп бирә. Дөйөм исемлек республика Хөкүмәте эргәһендәге китап сығарыу буйынса комиссия тарафынан раҫлана.

Ғәйәт ҙур күләмле ошо эште 60-ҡа яҡын кеше башҡара. Улар - мөхәррирҙәр, техник һәм биҙәлеш мөхәррирҙәре, корректорҙар, иҡтисадсылар, бухгалтерҙар, маркетинг бүлеге һәм башҡалар.

**Дәүләт иҫәбенә сыҡҡан китап нисек тарала һәм халыҡҡа нисек барып етә?**

**Зөлфиә Шәрифйән ҡыҙы:** "Китап" нәшриәте сығарған нәфис әҙәбиәт баҫмаларының күп өлөшө Мәҙәниәт министрлығы аша республика китапханаларына тарала. Дәүләт иҫәбенә сығарылғас, улар бушлай бүленә. Дәреслектәр иһә тулыһынса Мәғариф министрлығына тапшырыла. Әҙәби әҫәрҙәр китаптарының ҡалған өлөшөн һатыуға сығарабыҙ. Өфөнөң Ленин урамында фирма магазиныбыҙ һәм Хөкүмәт йортонда һатыу нөктәһе бар. Район-ҡалалар-ҙағы сауҙа нөктәләре күмәртәләп ала китаптарыбыҙҙы. Йә үҙҙәре һата, йә башҡа юл менән тараталар. Ғәҙәттә, проза әҫәрҙәре үтемлерәк. Сыҡҡан китаптарҙың яҙмышы төрлөсә була. Ҡайһы саҡ, һатылмай оҙаҡ ятып китер инде, тип уйлаһаң, ни ғилләләр менәндер инде, яңы автор китабы тиҙ арала һатылып та бөтә. Бөгөн "Урал батыр" эпосы бик популяр. "Әй Йола" төркөмөнөң бөтә донъяны шаҡ ҡатырған "Һомай" йыры шулай күтәрҙе башҡорт халҡының үлемһеҙ ижад емешен. "Урал батыр" һатыуҙа һәр саҡ бар. Уны төрлө форматта, төрлө биҙәлештә сығарабыҙ. Һүҙ эпосҡа күскәс, ҡырғыҙҙарҙың "Манас"ы иҫкә төшә. Ашхабадта үткән халыҡ-ара китап йәрминкәһендә булырға тура килгәйне. Иҫебеҙ китеп ҡайттыҡ: шул тиклем ҙур күргәҙмә залының бер яҡ ҡабырғаһын тулыһынса "Манас" алғайны. Уны нисек кенә итеп баҫып сығармағандар - көс еткеһеҙ ҙуры, бәләкәйе, тышлыҡтары биҙәлеше, ҡағыҙ сифаты, шрифт төрлөлөгө... Һушыбыҙ китте. Ҡырғыҙҙар "Манас"ты милли брендҡа әүерелдергән, эпостары менән шул тиклем ғорурланалар.

Китаптың тиҙ һатылып бөтөүе беҙҙең өсөн финанс яҡтан да әһәмиәткә эйә. Һатыу әйләнеше йылдам булған һайын, күберәк авторҙарҙы баҫып сығарыу өсөн шарт тыуа. Дәүләтебеҙҙең бөгөнгө ижтимағи-сәйәси ихтыяжына тап килгән баҫмалар ҙа мотлаҡ булырға тейеш. Быйыл, мәҫәләнән, Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығына ҙур иғтибар булды.

**Шәхси нәшриәттәр бөгөн нәфис әҙәбиәт әҫәрҙәрен баҫыуҙа ниндәй урын алып тора? Авторҙар менән нисек эшләйһегеҙ?**

**Мансур Риф улы:** Авторҙар беҙҙе үҙҙәре таба. Өфөлә типографиялар бит күп, әгәр дәүләт нәшриәте тендр аша эшләһә, клиенттарыбыҙ ҙа үҙ аяҡтары менән йөрөп һайлай китабын ҡайҙа баҫтырырға. Хаҡын һораша, ҡағыҙҙы ҡапшап ҡарай, биҙәлеш тураһында белешә, шул рәүешле сағыштыра, баһалай. Шунда барғайным, унда шулайыраҡ, тип фекерен әйтә, ҡарашын белдерә, үҙенә күрә аукцион үткәрә. Кеҫәһенән сығарған үҙ аҡсаһын һанай белә ул. Беҙгә бер юл һалған кеше икенсегә лә, өсөнсөгә лә килә. Йылына аныҡ ҡына, шуныса китап сығарҙыҡ, тип әйтеүе ауыр. Йыл йылға тап килмәй. Сама менән беҙҙең полиграфия продукцияһы күләменең 20 процентын китап нәшриәте алып торалыр, моғайын.

**Хәҙер "самиздат", йәғни үҙнәшер юлы менән китап сығарыу киң тарала бара. Һеҙҙең уйығыҙса, был ыңғай күренешме, әллә, киреһенсә, насармы?**

**Зөлфиә Шәрифйән ҡыҙы:** Үҙнәшергә ыңғай ҡараштамын. Китап баҙарының был сегменты беҙгә конкуренция тыуҙырмай. Киреһенсә, авторҙар һайлағанда, ярҙам итеп тә ҡуя. Кемдең кем икәнен алдан белеп торабыҙ. Дәүләт нәшриәте булараҡ, беҙ Яҙыусылар союзы менән тығыҙ бәйләнештәбеҙ. Китап сығарырға дәғүә иткән авторҙың союзда ағза булып тороу-тормауын белешәбеҙ иң элек. Ағза түгел икән, яҙған әйберҙәре, прозамы ул, йәки шиғырҙармы, Яҙыусылар союзы секцияларының береһендә тикшерелергә тейеш. Әгәр унда ыңғай

***✓ Тәүге йылда уҡ "Китап байрамы" йәрминкәһенең кимәле ныҡ юғары күтәрелде. Иртәнән кискә тиклем эшлекле аралашыу, төрлө йүнәлештәге спикерҙар майҙансыҡтары, ғөмүмән, көн һайын ғәйәт бай программа ҡаралғайны.***



баһалама бирһәләр, ҡулъяҙманы ҡабул итеп алабыҙ. Әҫәр гәзит-журналдарҙа баҫылһа, исеме сыҡһа, бигерәк тә яҡшы. Үҙнәшер юлы менән бер нисә китап сығарып, минең фәләнсә китабым бар, я һеҙ мине баҫмайһығыҙ, тип дәғүә белдереп йөрөүселәр ҙә юҡ түгел. Ошондай күренештән һуң, әлбиттә, үҙнәшер, дөйөм алғанда, оло мәғәнәгә, баһаға лайыҡ "китап", "әҙип һүҙе" төшөнсәләренең бәҫен төшөрмәйме икән, тип тә уйлап ҡуяһың.

**Мансур Риф улы:** Үҙнәшер авторҙары менән туранан-тура эшләгән ойошма етәксеһе булараҡ, шуны әйтер инем: ундай баҫмалар күберәк ғаилә тарихына, шәжәрәһенә, атай-әсәйҙәрҙең юбилейҙарына ҡарата уларҙың тормош юлын сағылдырыуға ҡайтып ҡала. Балалары йыйылышалар ҙа,

ятып уҡынылар, һөҡланып, комментарийҙар ҡалдырҙылар. Сөнки тормошсан, аңлайышлы итеп ябай һүҙҙәр, ябай тел менән яҙылған юлдарҙа, һәр ҡатын-ҡыҙ үҙен күрә. Фирүзә апай "Самрау" типографияһына китап сығарыуҙа ярҙам һорап мөрәжәғәт итте. Һатып бөткәс түләйем, тине. Беҙ икеләнәп ҡалдыҡ, интернетка инеп, "Бәйләнештәр"ҙәге уның бите менән таныштыҡ, ышандыҡ һәм риза булдыҡ. Тиражы 1000 дана китапты ул ай ярым эсендә һатып бөттө. Ай ярым эсендә!.. Һәм беҙҙең менән тулыһынса иҫәпләшеп ҡуйҙы. Тимәк, яҙыусы барыбер беренсе урында тора, әгәр ул үҙен таныту юлып таба икән, нәшриәт ниндәйҙер шарттар ҡуйып ыҙалатмаясаҡ уны.

маҡтауға лайыҡ. Йәмғиәтебеҙ яҙыусы һүҙен көтәме әле? Әлбиттә көтә. Сөнки хәл итәһе мәсьәләләребеҙ тормошта әле бик күп.

**Мансур Риф улы:** 90-сы йылдарҙа, республикабыҙ яҙмышы хәл ителгән осорҙа, Мостай Кәримдең юғары трибунан сығышы төбәк парламенты депуттарына дөрөҫ ҡарарҙар ҡабул итеү өсөн әтәргес булғайны. Бөгөн ул кимәлдә һүҙ әйтер яҙыусыларыбыҙ юҡ шул. Заманса стилгә күсергә ваҡыт, үҙ һүҙеңде яныса әйтергә өйрәнергә кәрәк, минеңсә.

**▸ 12 майҙа Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Ленин урамындағы "Китап" нәшриәтенең фирма магазинында булды. Тимәк, ул нәшриәт эштәре менән яҡындан тороп ҡыҙыҡһына. Эшегеҙҙә**

дыҡ. Радий Фәрит улы беҙҙең дөйөм ынтылышты тормошҡа ашырҙы. Һөҙөмтәлә, ысынлап та, уникаль проект ғәмәлгә ашты. Барлыҡ нәшриәттәр ҙә Ҡыҙыл майҙанға бара алмай, ә беҙгә килеү күптәр өсөн уңайлы. Ҡатнашыусылар һаны йылдан-йыл арта. Төбәк нәшриәттәре етәкселәре киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре менән аралашҡанда, Өфө Мәскәүҙе уҙҙырҙы, тип маҡтап та ебәрҙеләр. Семинарҙар ойошторола, презентациялар үтә, китап сауҙаһы йылдам бара. Волонтерҙар бөтә ерҙә лә ярҙамға килергә әҙер тора.

Өҫ көн буйына барған сара "Урал батыр" ерендә йыл китабы" конкурсы йомғағы менән тамамлана. Салехардтан алып Ҡырымға тиклем киңлектә ятҡан ҡалаларҙан конкурсҡа бик күп китаптар килә. Беренсе йылда унда 18 нәшриәт ҡат-

# БӨГӨН ДӘ КӘРӘК,

## заманса әйтергә өйрәнһен!

әйтәйек, әсәйҙәренең 65 йәшенә китап сығаралар. Ғәҙәттә, тиражы ла ҙур булмай. Туғандары, яҡындары араһында таралып бөтә. Презентация үткәрмәйҙәр, киң аудиторияға сығармайҙар. Бер ҙә зыяны булмаған тенденция был, киреһенсә, йәш быуынға ғаилә ҡиммәттәрен һеңдереү өсөн бик файҙалы. Беҙ сығарған үҙнәшер китаптарының 90 проценты шундайҙар. Эйе, ижад емештәрен дә тотоп киләләр. Үҙ сиратыбыҙҙа беҙ редакторлау, корректура, ГОСТ талаптарына яраштырыу кеүек тәҡдимдәр әйтәбеҙ. Эйе, уларҙың һәр ҡайһыһы өсөн түләргә кәрәк. Күп осраҡта заказсы баш тарта, аҡсаһын йәлләй. Ябай күҙгә лә текстағы ҡытыршылыҡтар, хаталар айырым-асыҡ күренеп торһа ла, ҡалайтаһың, баҫабыҙ.

**▸ Китапты ҡулға алғас, беҙ иң элек авторы кем булыуын белергә теләйбеҙ. Күптәр, миңенсә, ҡайҙа сыҡҡан, кем сығарған, тип ҡыҙыҡһынмай ҙа хатта. Ғөмүмән, китап ул - авторҙыҡы. Шул уҡ ваҡытта, бөгөнгө ысынбарлыҡ авторҙы икенсел урынға ҡуя, сөнки китабының сығыу-сыҡмауы тулыһынса нәшриәт ихтыярында. Һеҙ ошо фекер менән ризаһығыҙмы?**

**Мансур Риф улы:** Юҡ, был раҫлау менән риза түгелмен. Интернет заманында яҙыусы нәшриәткә генә ҡарап, ҡасан китабым сығыр инде, тип йылдар буйына көтөп ятырға тейеш түгел. Был йәһәттән өлгө итеп, шағирә Фирүзә Абдуллинаны килтерә алам. Сөнки уның ижадын күтәрмәләүҙә беҙҙең дә өлөшөбөҙ бар. Ул тәүҙә "Бәйләнештәр" социаль селтәрендә киң танылыу тапты. Шиғырҙарын йыйылып

**▸ Бөгөнгө көндә яҙыусы кем ул? Йәмғиәт уның һүҙен көтәме әле?**

**Зөлфиә Шәрифйән ҡыҙы:** Совет осоронда "профессиональ яҙыусы" тигән төшөнсә бар ине. Сөнки китап яҙып ҡына ла йәшәп, ғаилә аҫрап булған. Өлкән быуын яҙыусыларының, гонорар аҡсаһына бер йылда машина алдым, киләһенеке дачаға етте, тип һөйләгәнен ишеткәнем бар. Ижади отпуск та бирелгән, Мәскәү эргәһендәге "Переделкино" ял йортонда айҙар буйы әҫәрҙәре өҫтөндә эшләгәндәр.

Хәҙер яҙыусыларҙың хәле башҡа. Ул, йоҡоһонан, ғаиләһенән өҙөп, әҫәре өҫтөндә ултырырға ваҡыт таба, уны баҫтырып сығара. Һатыу, китапты таратыу өсөн дә яуап бирә. Заманы шулай хәҙер. Быға күнергә һәм яраҡлашырға ваҡыт инде. Яҙыусы ижад емешен үҙе лә рекламаларға тейеш. Айгиз Ғиззәт улы Баймөхәмәтов был йәһәттән өлгө булырлыҡ. Ул үҙ әҫәрҙәрен халыҡҡа тиҙ арала алып барыу юлдарын тапты. Китаптары сит илдәрҙә лә баҫыла, әҫәрҙәре сәхнәләргә сыҡты. Үҙенең ижадына ул үҙе продюсер. Был

**һеҙ республика ярҙамын тояһығыҙмы?**

**Зөлфиә Шәрифйән ҡыҙы:** Беҙ һәр ваҡыт тулыһынса республика ярҙамы менән эшләйбеҙ. Дәүләт нәшриәте хөкүмәт ярҙамынан тыш булмай, шуға Башҡортостанда үҙ нәшриәтебеҙҙең булыуына сикһеҙ рәхмәтлебеҙ. Күпме йәш яҙыусыны әҙәбиәткә алып килгән "Йәштәр тауышы" серияһы тураһында башҡаларға һөйләһәк, беҙгә аптырап ҡарайҙар. Ә "Китап-Байрам" йәрминкәһе үҙе генә лә ни тора?



**- Эйе, быйыл Өфөлә "Китап байрамы" өсөнсө тапҡыр үтә. Ул республикабыҙҙың мәҙәни тормошонда сағыу бер сараға әүерелде. Ғөмүмән, ошо байрам тураһында фекерҙәрегеҙ менән уртаҡлашһағыҙ ине...**

**Зөлфиә Шәрифйән ҡыҙы:** Мәскәүҙә Ҡыҙыл майҙанда үткән китап йәрминкәләрендә даими ҡатнашабыҙ. Шундай байрамды үҙебеҙҙә лә үткәреү тураһында гел хыяллана инек. Бер йылда Силәбегә китап күргәҙмәһенә саҡырылдыҡ. Ул китапхана үтте. Ҙур булмаған майҙанда шундай сара ойоштороуҙарына хайран ҡал-

нашҡайны, былтыр 33 булды. Быйыл ҡатнашыусыларҙың һаны артыр, тип өмөт итәбеҙ. Иҫ киткес сифатлы баҫмалар килә конкурсҡа, уларҙан күҙҙе алып булмай. Шуны ла өҫтәргә кәрәк: быйыл "Китап байрамы"нда Рәсәй төбәктәренең үҙәк китапханалары етәкселәре лә ҡатнаша. Сөнки Башҡортостан өлгөһөндә һәр ерҙә ошондай сара үткәреү тураһында ҡарар ҡабул ителгән. Ғөмүмән алғанда, "Китап байрамы" халыҡ-ара китап йәрминкәһе - Башҡортостан өсөн ҙур табыш ул.

**Мансур Риф улы:** Тәүге йылда уҡ "Китап байрамы" йәрминкәһенең кимәле ныҡ юғары күтәрелде. "Самрау" типографияһы исеменә саҡырыу алғас, дөрөҫөн әйткәндә, сираттағы һабантуй ойошторалар, тип ҡабул иттек. Йырлап-бейейҙәр ҙә, шуның менән йәрминкә тамам да булыр, тигән һымағыраҡ уйланыҡ. Эсенә инеп китеп күргәс, аптырапным. Иртәнән кискә тиклем эшлекле аралашыу, төрлө йүнәлештәге спикерҙар майҙансыҡтары, ғөмүмән, көн һайын ғәйәт бай программа ҡаралғайны. Нисә өҫтәл, шкаф, кәштәләр кәрәк - бөтәһе лә бирелә. Һәр нәшриәткә бер нисә волонтер беркетелә. Улар: "Хәлдәрегеҙ нисек?", "Бөтәһе лә бармы?", "Һыу етәме?" тип белешеп кенә торалар. Берәй һорау килеп тыуһа, йәрминкә чатына яҙыуын менән, мәсьәлә хәл ителә. Хәүефһеҙлек сараларының юғар кимәлдә ҡуйылыуы нык оҡшаны. Йәрминкә майҙансығына ингән урындарға өҫ яҡлап металлға тикшереү рамкалары ҡуйылған. Ике йылда ла китап йәрминкәһе бик юғары кимәлдә үтте, хатта "шикарный" тип әйтер инем. Сауҙа йылдам барҙы, "Башҡортостан", "Өфө" тип яҙылған ручкалар, бесполкалар, футболкалар, мейестән сыҡҡан ҡалас шикелле, шунда уҡ һатыла, эшләп өлгөрмәйбеҙ. Халыҡ-ара "Китап-Байрам" китап йәрминкәһендә ҡатнашҡан ике йыл да беҙҙең типография өсөн емешле булды. Тәүге йылда "Ағиҙел" журналы редакцияһы үҙенең 100 йыллығына ҡарата сығарған ике томлыҡ хикәйәләр йыйынтығы һәм Розалиә Солтангәрәеваның флешкаһы беркетелгән ҡобайырҙар китабы өсөн ике номинацияла икенсе һәм өсөнсө урындар алдыҡ. Былтыр "Самрау" типографияһында баҫылған Башҡортостан Фәндәр Академияһының башҡорт ырыуҙары картаһы китабы юғары баһаға лайыҡ булды.

Мәскәү, Татарстан, Силәбе тарафтарынан килгән коллегаларыбыҙ менән аралашҡанда ла уларҙан "Китап байрамы"на юғары баһалар ишеттек. Түккән аҡса, һис шикһеҙ, үҙ маҡсатына өлгәште. Мин Зөлфиә Шәрифйән ҡыҙы менән тулыһынса килешәм - сара республиканың бер брендына әүерелә бара.

***Интернет заманында яҙыусы нәшриәткә генә ҡарап, ҡасан китабым сығыр инде, тип йылдар буйына көтөп ятырға тейеш түгел. Был йәһәттән өлгө итеп, шағирә Фирүзә Абдуллинаны килтерә алам. Сөнки уның ижадын күтәрмәләүҙә беҙҙең дә өлөшөбөҙ бар. Ул тәүҙә "Бәйләнештәр" социаль селтәрендә киң танылыу тапты. Шиғырҙарын йыйылып ятып уҡынылар, һөҡланып, комментарийҙар ҡалдырҙылар. Сөнки тормошсан, аңлайышлы итеп ябай һүҙҙәр, ябай тел менән яҙылған юлдарҙа, һәр ҡатын-ҡыҙ үҙен күрә.***

**Шулай итеп, беҙ республикабыҙҙа китап нәшриәте эше һәм торошо менән таныштыҡ. Китаптар төрлө юлдар менән сыға, уларҙы һатып алалар, уҡыйҙар. Яҙыусылар ижады ла туҡтап ҡалмаған. Башҡортостанда "Китап Байрам" китап йәрминкәһенең үтә башлауы һәм быйыл өсөнсөгә ойошторолоуы, китап донъяһына яңы һулыш өҫтәй кеүек. Белем, аҡыл, хәтер шишмәһе булған был инеш бер ваҡытта ла ҡоромаһын, тип теләйбеҙ.**

**Рәсүл Байгилдин әңгәмә ҡорҙо.**

✓ *Социализмда ла йәшәнек, капитализмдың "тәмле" емештәренән дә ауыҙ иттек. Ә беҙҙең өлкән быуын кешеләре һаман бала саҡтарын, үҫмерлек һәм йәшлек йылдарын һағынып иҫкә ала...*



ХӘТЕРКИТАП

**Һәр бер әҙәми заттың ғүмер башы - бала сағында. Бәлки, тап ошо йылдар кеше ғүмеренең иң бәхетле осоролор ул. Әлбиттә, заманалар ауырҙарҙан ауыр булып, һуғыш-ҡыйралыштар сығып, ас-яланғас, етемлектә үҫкән, белем алыуҙан мәхрүм ҡалған балаларҙы бер нисек тә бәхетле булған тип әйтергә тел әйләнмәй. Беҙ, йәше инде 60-70-тән уҙған оло быуын вәкилдәре, балалыҡ йылдарыбыҙ, ысынлап та, бәхетле заманға тура килде, тип ауыҙ тултырып әйтә алабыҙ. Нисек шулай булмаһын ти: атайҙарыбыҙ, яраланған булһа ла, ҡанлы яуҙарҙан тере ҡайтҡан, инәйҙәребеҙ, һәр яҡтан етешһеҙ булған көнитмешкә ҡарамайынса, 50-се йылдарҙа беҙгә ғүмер бүләк иткән.**

# ОЛОҒАЯ БАРҒАН ҺАЙЫН...

## кешенең бала сағы уға яҡыная бара

**(Эссе)**



Совет власы түңкәрелгәс, ул осорҙо яманатлы итеүселәр оторо күбәйеп киткәйне: йәнәһе, коммунист етәкселәр халыҡҡа тик ауырлыҡтар, бәлә-ҡаза ғына килтергән, социализм - иң алама ҡоролош, ә капитализм барыһын да бай һәм бәхетле итәсәк. Социализмда ла йәшәнек, капитализмдың "тәмле" емештәренән дә ауыҙ иттек. Ә беҙҙең өлкән быуын кешеләре һаман бала саҡтарын, үҫмерлек һәм йәшлек йылдарын һағынып иҫкә ала...

Бала-сағаға күп кәрәкмәй ине ул саҡтарҙа: тамағың туҡ, өҫтөңдә тегенсе әбей тегеп биргән күлдәк-ыштан, йәй көндәрен ялан тәпәй йүгерепуйнап көн үткәрәһең. Уйнап туйғас, асығыбыраҡ кителә. Әсәйҙәребеҙ туҫтаҡ тултырып яңы ғына ойотолған ҡатыҡ һалып бирә, шунда әпәкәй турап тороп ашайһың - шул тиклем тәмле була, кәнфит-шәкәр юҡмы, тип һорағаныбыҙ иҫтә ҡалмаған. Ишеү етмәһә, тауыҡ йомортҡаларын ҡайнатырға ҡуйылған самауырға һалып бешерәбеҙ: эҫе йомортҡаны әрсеп, тоҙ һибеп, әпәй телеменә ҡаймаҡ яғып тәғәмләнһәң, үҙеңде бер серегән бай балаһылай тояһың.

Олораҡ малайҙар аяҡ өшөрлөк һалҡын һыулы бәләкәй генә Ҡыйғы йылғаһына йылым менән балыҡ һөҙөргә барғанда, беҙ ҙә эйәрәбеҙ: һыу тәрәнерәк булған сөңгөлдө һөҙөп алып сыҡҡан мәлдә йылымда иң кәмендә бер-ике сабаҡ, ҡайһы берҙә көмөш бәрҙе йә иһә шылғаяҡ шамбы һикергеләп ятҡанын күҙәтеү - үҙе бер бәхет. Балыҡ һөҙөү тамамланғас, йылымсылар уны бүлешеп ала. Бер малайҙы, күҙен ҡаплатып, сүгәләтеп ултырталар, ә уның артында балыҡ бүлеүсе малай тора. Ул биҙрәләге балыҡтарҙы берәмләп ала ла, һорау бирә: "Был балыҡ кемгә?" Тегеһе балыҡ һөҙөүсе малайҙарҙың исемдәрен сиратлап әйтә бара. Һәр береһенә берәр балыҡ эләгеү менән башына күлдәк ҡапланған малай сираттағы балыҡты "Быныһы колхозға", ти. Колхоз тигәнең йылым хужаһы була инде. Мин был күренеште малайҙарҙың уртаҡ табышты ғәҙел бүлешеү алымы булғандыр тим. Шулай ҙа бер көндә балыҡ һөҙөү низағ менән тамамланды: бүленгән балыҡ менән риза булмаған өлкәнерәк ике малай, бер-береһен хәрәмләшеүҙә ғәйепләп, тас та тос һуғыша башламаһынмы! Береһенең хатта танауы ла ҡанап китте: уның береһенән береһе бәләкәсерәк ҡустылары, яр буйында аяҡтарын һәлберәтеп, теҙелешеп ултырған көйө, ағаларын йәлләп, аҡырышып илай башланы. Шулай ҙа был тамаша үҙ-ара ярашыу менән тамамланды. Ҡайһы саҡта беҙгә, ыбыр-сыбар малай-шалайға ла, өлөш сығарыла: беҙгә вағыраҡ сабаҡ-фәләнде биреп ҡайтаралар. Шул ваҡ балыҡтарҙы таҙартып тоҙлайбыҙ ҙа, өй ҡыйығына ябылған, йәйге эҫе ҡояшта ҡыҙып йылынған ҡалайға теҙеп һалып, "бешереп" ашайбыҙ. Тәмлелегенә ни әйтерһең!

Баҡсабыҙ артындағы һыртта ҡар тиҙ иреп бөтә, яҡын-тирәлә йәшәгән малайҙар йәшәрә башлаған сиҙәмгә шар һуғырға йыйыла. Был уйын шунан ғибәрәт: һәр кем нәҙегерәк кипкән ағастан ҡулайлы итеп яһалған шар һуға торған таяҡ алып килә, шулай уҡ оҫтараҡ малайҙарҙың береһе ағас оронан юнғыслап эшләнгән бәләкәй генә шар килтерә. Өҫкә сойорғотолған шар бер аҙ түбәнәйеүгә, уға шар таяғын туралап ташлап, тейҙерә алыу кәрәк: шулай булғанда, шар ҡаңҡылдап әллә ҡайҙа осоп та китә. Шар һуғыусылар ике командаға бүленә, үҙҙәренә түрә һайлай, бер команда шар һуға, икенсеһе шар артынан йүгерә. Һуғыусы һәм көтөүсе командалар урындары менән алышынып тора. Мәргәндәре күберәк булған команда оҙаҡ ҡына ваҡыт шар һуғып кинәнә, икенсе команда малайҙары, бер туҡтауһыҙ һауаға осоролоп торған шар артынан йүгергеләп, арып та бөтә. Шулай ҙа малайҙар йыл һайын ҡыҫҡа ғына яҙ миҙгелендә ошо уйынға бик тә теләп йөрөп, үҙенә күрә бер рәхәтлек кисерә торғайны...

Балалыҡ йылдарын мәктәптән башҡа күҙ алдына килтереп булмай. Ауылыбыҙ мәктәбенең ике генә ағас бинаһы булды, күрше Ҡурғаш ауылы балалары интернатта йәшәне. Беҙгә 8-се класс бөткәнсе барса предметтарҙы ла тик башҡорт телендә генә уҡыттылар. Уҡытыусы - ауыл халҡы өсөн бик абруйлы шәхес, беҙ ҙә уҡытыусыларыбыҙҙы хөрмәт иттек, улар өйрәткән-ҡушҡандан ситкә тайпылманыҡ. Ул ваҡыттарҙа ауылдарҙа махсус урта йә иһә юғары белемле педагогтар бик аҙ булды. Йыш ҡына уҡытыусы вазифаһын педучилищеларҙа һәм вуздарҙа уҡып йөрөгән практиканттар башҡарҙы. Район үҙәгенән беҙҙең мәктәпкә рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы итеп ебәрелгән Зарема-апа иҫемдә ҡалған. Уны беҙ беренсе дәресенән уҡ яраттыҡ, үҙе йәш кенә һәм төҫкә лә бик сибәр. Рус телендәге хикәйәләрҙе артистарса, шул тиклем ылыҡтырғыс итеп уҡый - иҫең-һушың китерлек. Уҡытыусы йоғонтоһо булғандыр, рус телендәге китаптарҙы күп уҡый башлағайным шул саҡта уҡ...

Беҙҙең балалыҡ, йәшлек йылдарында октябрят, пионер, комсомол ойошмаларының дәрестәрҙән һуң уҡыусыларҙы төрлө эштәргә йәлеп итеүе мәңгелеккә хәтергә һеңеп ҡалған. Тимур командаһы булып, ҡарт-ҡороға утын бысырға, ярырға, әрҙәнәгә өйөргә йөрөйбөҙ. Яҙҙарын ауыл урмансыһы беҙҙе ауылыбыҙ тирәһендәге ныҡ һирәгәйгән урманға ҡарағай ултыртырға алып бара, ярышып тигәндәй эшләйбеҙ, ял иткәндә мәрәкәләшеп, шаярышып ҡыуанабыҙ. Ә байрам көндәрендә, ауыл клубында үҙебеҙ әҙерләгән концертта ҡатнашҡаныбыҙҙа, ауылдаштарыбыҙҙың беҙҙе ихлас алҡышлауы шундай шатлыҡлы, үҙебеҙҙе хас та ысын әртис итеп тойғанбыҙҙыр, тим.

19 май - пионерҙар көнө, дәрестәр ҡыҫҡартыла. Төшкө аш менән тәғәмләнгәс, йылға аръяғындағы яланда йыйылышабыҙ. Бында пионер сборы уҙғарыла, пионерға алыу тантанаһы, төрлө спорт ярыштары, уйындар ойошторола. Кискә табан ялан уртаһында ҡоро-һарынан бейек итеп өйөлгән пионер усағы янына йыйылабыҙ. Бейеккә, өҫкә табан үрмәләгән ут-ялҡынға ҡарап ултырып, йырлашабыҙ: "Взвейтесь кострами, синие ночи!"

Совет осоронда балаларҙың йәйге ялын ойоштороуға иғтибар ҙур булды. Ҙур илебеҙҙә тиҫтәләгән мең пионер лагерҙары эшләне, Ҡырымдағы бөтөн донъяға билдәле булған "Артек" лагерында дуҫ илдәрҙән килгән балалар ҙа ял итә ине. Шәхсән үҙем пионер лагерында ике тапҡыр булдым, әммә пионервожатый вазифаһында: 1971 йылда Дыуан районының Иҫке Хәлил ауылында һәм 1973 йылда СССР оборона министрлығының Ҡыҙыл Пахралағы Юрий Гагарин исемендәге пионер лагерында. Һуңғыһы бер иҫтәлекле ваҡиға менән бәйле хәтергә уйылып ҡалған. Минең отрядта Алеша Микоян исемле Мәскәү малайы бар ине. Бик ҡыҙыҡһыныусан, күп нәмәне белә, фәлсәфә һатырға ярата, шул уҡ ваҡытта үтә шаян. Бер ваҡыт уның менән бәхәсләшеп киттек. Темаһы ниндәй бит әле: Советтар Союзында ғәҙеллек, тигеҙлек бармы? Әлбиттә, мин, пионервожатыйҙарса, совет идеологияһы ҡушҡанды һөйләйем, ә Алешка - киреһен. Һәм ул, үҙенең фекерен нигеҙләп, бына нимә тәҡдим итте: "Әйҙәгеҙ, яҡындағы ауылға барып, колхозсыларҙың нисек йәшәгәнен күреп киләйек. Бәләкәй генә иҫке ағас өйҙәрҙә йәшәйҙәр, һырылған фуфайка, кирза итек, калош кейеп йөрөйҙәр. Гел бер төрлө ризыҡ ашайҙар, йәй көнө иттәре лә юҡ. Ни өсөн Мәскәүҙә аҡсалы халыҡ етеш йәшәй, ә колхозсыларға йүнләп аҡса ла түләмәйҙәр? Шул булдымы тигеҙлек, шул булдымы ғәҙеллек?" Тамам аптыратты мине был 14 йәшлек малай, ни тиергә лә белмәйем. Бер аҙҙан миңә уның ҡартатаһы менән телефондан һөйләшергә тура килде. Бер көндө мине штабҡа саҡырҙылар, лагерь начальнигы, майор Хәмитов тиҙ генә килеп етергә ҡушҡан. Ул миңә әйтә: "Тиҙҙән Алешка Микояндың ҡартатаһы Анастас Иванович Микоян шылтыратасаҡ, ейәне тураһында һораша". Шунда ғына Алешканың ниндәй ғаиләлә тыуғанын белдем. Анастас Иванович менән оҙаҡ һөйләшмәнек, мин уға ейәнен маҡтап та ебәрҙем: фекерле малай, әңгәмәләшергә, бәхәсләшергә ярата, тәртип боҙмай, тимен. Ә Анастас Иванович бына ни ти: "Его отец Алексей Микоян служит командующим ВВС Туркестанского военного округа, дома бывает редко, поэтому сам воспитываю внука. Вот что, товарищ пионервожатый, он хулиганистый мальчик, держи его в ежовых рукавицах!"

Әйткәндәй, бик күп йылдар үткәс, беҙ Алексей Микоян менән интернет селтәрендә аралашып алдыҡ. Ул хәрби тәржемәселәр институтын тамамлай, ғәрәп теле белгесе, күп йылдар буйына ғәрәп илдәрендә хеҙмәт итә. Ул социаль селтәрҙәрҙә ғәрәп илдәре менән дуҫлыҡты ҡаҡшатыуға юл ҡуймау мәсьәләһен күтәреп сыҡты, ил Президенты В.В. Путинға ошо хаҡта асыҡ хат менән мөрәжәғәт итте...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йәшәйешебеҙҙең бер яҙылмаған ҡануны бар: олоғая барған һайын кешенең бала сағы уға яҡыная бара. Бала саҡ йылдары, шул саҡтарҙа кисерелгән хәлдәр, бергә үҫкән йәштәштәр йышыраҡ иҫкә төшә, һағыш ҡатыш һағынышлы хистәр күңелдәрҙе биҙәй. Хатта ҡайһы бер психологтар оло кешегә бала саҡтағы холҡона хас булған сифаттар кире әйләнеп ҡайта, тип иҫәпләй. Бала сағында үҙеңде ни тиклем бәхетле тойғанһың, олоғайғас та шул тиклем үк бәхетле булаһыңдыр ул. Бынан бер генә һығымта яһап булалыр, тим: балаларыбыҙҙың, ейән-ейәнсәрҙәребеҙҙең тормош тигән юл башы матур, йәмле һәм ғәмле булһын, улар белемле, әхлаҡлы һәм кешелекле булып үҫһен өсөн ҡулыбыҙҙан, аңыбыҙҙан килгәндең барыһын да эшләп өлгөрәйек, замандаштар.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

✓ ***Радий Хәбировтың "Урал батыр" эпосы көнө булдырыу тураһындағы тәкдимен ишеткәс, "кылт" итеп тағы Хәйҙәр Ғарипов иҫкә төштө. Аҙ ғына алдараҡ китмәнеме икән скульптор?***



*ХӘТЕРЛӘП...*

# УЛ ҮҘЕНӘ ҺӘЙКӘЛ ҠУЙҘЫ!

**Кеше китә, эҙе ҡала... Учалы районында тыуып, оҙаҡ йылдар Сибай ҡалаһында йәшәгән билдәле скульптор, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Рамаҙан Өмөтбаев исемендәге Сибай ҡала премияһы лауреаты Хәйҙәр Хәлидәр улы Ғарипов республиканың мәҙәни тормошонда яҡты эҙ ҡалдырҙы. Ул арҙаҡлы шәхестәргә һәйкәл-бюстар ижад итеп, үҙенә лә мәңгелек дан һәйкәле ҡалдырҙы.**



Бөгөн беҙ Сибай институты алдындағы, Сибай ҡалаһы урамдарындағы һындарға ҡарайбыҙ ҙа, Хәйҙәр Ғариповты иҫкә алабыҙ. Тик бына әлеге лә баяғы, беҙ таланттарҙың ҡәҙерен иҫән сағында белеп етмәйбеҙ шул, тигән үкенеү ҙә яңырғандай була. Хәйҙәр Хәлидәр улы үҙ донъяһында янып йәшәне, эшенә мөкиббән ине, "Атайсал" гәзите редакцияһына һуңғы килгәндә лә ҡулына эскиз тотҡайны. Ул Өфөлә Урал батырға арналған һәйкәлдәр композицияһы булдырырға хыялланды. Әммә уны күтәрмәләп алған, финанс ярҙам күрһәткән кеше табылманы. Яңыраҡ республикабыҙ Башлығы Радий Хәбировтың "Урал батыр" эпосы көнө булдырыу тураһындағы тәкдимен ишеткәс, "ҡылт" итеп тағы Хәйҙәр Ғарипов иҫкә төштө. Аҙ ғына алдараҡ китмәнеме икән скульптор? Бәлки, мәшһүр эпосыбыҙға иғтибар артҡан был мәлдә батырыбыҙға мөһабәт һәйкәлде лә ең һыҙғанып ул ижад итер ине.

Эйе, Хәйҙәр Ғарипов ҡулдары менән бик күп һындар ҡалҡып сыҡты. Сибай ҡалаһының ял итеү урындарында, скверҙарҙа торған төрлө бюст-скульптураларҙы күрә-белә йөрөйбөҙ. Таусылар проспектында беҙҙе ғорур Салауат Юлаев һыны ҡаршы алһа, Белов урамында - Советтар Союзы Геройы Федор Белов бюсы, Чайковский урамында Башҡортостандың Рәсәйгә ҡушылыуына 450 йыл тулыуға арналған мемориал комплексы тора. Ә инде Сибай институты алдында уҡыу йорто студенттарын, килгән ҡунаҡтарҙы көн һайын Шәйхзада Бабич, Зәйнәб Биишева, Рәми Ғарипов, Һәҙиә Дәүләтшина, Мөхәмәтша Буранголов һыны сәләмләй. Әйткәндәй, был бюстар аллеяһы дауамлы булырға тейеш ине. Тик ниәттәр ғәмәлгә ашмай ҡалды, скульптор 2021 йылда арабыҙҙан китте.

18 майҙа, Халыҡ-ара музейҙар көнө алдынан, Сибай институтында билдәле скульпторға арналған музей асылыуы бик мәртәбәле ғәмәл булды. Был идея бынан ике йыл элек тыуа. Скульпторҙың ҡатыны, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Таңсулпан Ғарипова башланғыһында Сибай ҡала башҡорттары ҡоролтайының ул саҡтағы рәйесе Роза Бикбованың инициативаһын Өфө фән һәм технологиялар университетының Сибай филиалы коллективы бик матур итеп тормошҡа ашырҙы.

- Хәйҙәр Хәлидәр улы Ғарипов ғәжәп бай фантазиялы, ижади илһам менән янып йәшәгән талантлы скульптор булды. Уның йөрәге аша үткәреп, оҫта ҡулдары менән һынландырылған бик күп һәйкәлдәре, бюстары Башҡортостандың төрлө төбәктәрендә урын алды. Уның ижадына иғтибар итһәк, шул айырым билдәләүгә лайыҡ: Хәйҙәр Ғарипов башҡорт халҡының арҙаҡлы шәхестәрен данлай, тарихты ихтирам итә һәм ҡарашын киләсәккә төбәй, - тине музейҙы асҡандағы сығышында институт директоры Илдар Хәмитов.

Прозаик, драматург, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Таңсулпан Ғарипованың сығышы иһә йылы тәьҫораттарға бай булды.

- Хәйҙәрҙең ижад юлы беҙҙең ғаилә тормошо аша үтте. Йәш кенә саҡта таныштыҡ. Ул Өфө сәнғәт училищеһына уҡырға инә алмағас, Ҡаҙағстан тарафтарында бер йыл йөрөп килде, аҙаҡ баш ҡалала төҙөлөштә эшләне. Әммә рәссам булыу теләге уны бер минутҡа ла ташламаны. Салауат Юлаев һәйкәле янында осрашыуыбыҙ һаман иҫтә. Ләйсән ямғыр яуа ине. Шунда ул миңә үҙе яҙған шиғырҙы һөйләне:

*Урал батырҙы үлгән тиҙәр,*
*Уның үлгәндәрен кем күргән?*
*Әгәр үлгән булһа, үлгәндәрҙең*
*Гүрҙән сыҡҡандарын кем күргән?*

Шулай тине лә: "Мин ошо Ағиҙел ярына Урал батыр һәйкәлен ултыртасаҡмын", - тип өҫтәп ҡуйҙы. Шул саҡта уҡ уның шундай бөйөк хыялы бар ине. Аҙаҡ беҙ Нестерев исемендәге музейға барҙыҡ. Хәйҙәр миңә бындағы һәр материал тураһында тәфсирләп һөйләне. Төҙөүсенең шул тиклем белемле, мәғлүмәтле булыуына иҫем китте. Ҡайҙан беләһең, тип һорағайным, 8-се кластан ситтән тороп Мәскәү художество студияһында уҡыуын әйтте. Бәләкәй генә ауылдан бер малайҙың шунда уҡыуын уйлап ҡарағыҙ әле! Хәйҙәр маҡсаттарына тоғро ҡалды. Уҡырға инде, белем алды, янып ижад итте. Ауыр шарттарҙа эшләне, ҡайһы бер оҫтаханаларҙан уны ҡыуып та сығарҙылар, ҡайһы бер һындар юғалып та бөттө, бәғзеләре балсыҡ килеш ҡатып ҡалды, сөнки формаға ултыртып, артабан эшләп бөтөргә финанс булманы. Муса Мортазинды ла эшләгәйне бит ул. Портретты дөрөҫ тота белде, реалист ине. Ҡайһы бер дуҫтарына шәхси бюстарын да эшләп бирҙе. Уҡыу бөткәс, Баймаҡҡа эшкә ҡайттыҡ. Уны сәнғәт мәктәбенә директор иткәйнеләр, әммә тыуған яғын һағынды. Унан Учалыла йәшәнек, унда музей булдырҙыҡ. Учалы тарафтарында Хәйҙәрҙең эштәре бик күп. Тыуған ауылына 9 метрлыҡ һалдат һыны ҡуйҙы. Аҙаҡ Сибайға килдек. Бында ла илһамланып эшләне. Мин һәр саҡ уға ярҙам иттем, хатта үҙемә түгел, уға күберәк иғтибар бирҙем, уның хыял-пландары менән йәшәнем. Эйе, холҡо ярһыу ине, ул "түңәрәктәр"гә һыйманы, үҙһүҙле ине, һәр саҡ шул "түңәрәктәр"енән "өсмөйөштәр"е һерәйеп сығып торҙо. Ижад кешеләре шулай була ла инде, уларҙың айырым бер донъя бит инде ул. Хәйҙәр миңә: "Таңсулпан, башҡа ҡатындар ире алып ҡайтҡан аҡсаны һанап ҡына ултыра, ә һин минең менән бергә эшләйһең", - ти торғайны. Икәү бергә бик күпте күрҙек, күп һынауҙар үттек. Миндә бер бокал бар, унда "За каждым мужчиной стоит женщина, этой женщиной была ты, Тансулпан" тип яҙылған. Хәйҙәр уны миңә бүләк иткәйне. Шуны музейға тапшырам, - тине Таңсулпан Хизбулла ҡыҙы һәм музей асыуға көс һалыусыларға ҙур рәхмәттәр еткереп, киләсәктә музейҙың тулыланыуына ышаныс белдерҙе.

Ысынлап та, һәр бер сығыш яһаусы матур хәтирәләр генә әйтеп ҡалманы, ә үҙендә ниндәйҙер фото йә башҡа иҫтәлек барлығын әйтеп, уны музейға тапшырырға һүҙ бирҙе. Яңы ғына асылған музей бик ыҡсым, унда оҫтаның ҡайһы бер ҡул эштәрен, эскиздарын, фотоларын, уның хаҡындағы гәзит яҙмаларын күрергә була. Шулай уҡ музейға ҡуйылған экран аша уның Сибай институты алдына ҡуйған бюстарын тантаналы асыу видеояҙмаларын күрергә мөмкин.

Әйткәндәй, был - уҡыу йортонда асылған дүртенсе музей. Йәштәр уларҙы ҡарап, өйрәнеп, һабаҡ алып, илһөйәр шәхестәр булып үҫерҙәр һәм тормошта яҡты эҙ ҡалдырыу өсөн тырышырҙар, тигән ышаныстабыҙ. Ә беҙ халҡына тоғро хеҙмәт итеүе менән үҙенә матур "һәйкәл" ҡуйып китеүсе һәйкәлдәр оҫтаһын онотмаҫҡа, бюстар янынан үткән һайын уның рухына доғалар ҡылып, рәхмәттәр әйтеп, яҡты уйҙар менән иҫкә алырға бурыслы.

**Резеда УСМАНОВА,**
**Сибайҙың "Атайсал" гәзите хәбәрсеһе.**

*МӘҘӘКМЕ? МӘҘӘК!*

# ИСЕМ-ШӘРИФЕМДЕ КҮРГЕ КИЛӘ!

"Таң" гәзите редакцияһы бүлмәһендә Самат ағай Ғәбиҙуллинден (күптән мәрхүм, урындары йәннәттә булһын) яҙып бөткәнен тын ғына көтөп ултырам. Уға ниндәйҙер мәҡәләне тиҙ генә мөхәрриргә индереп бирергә кәрәк икән. Шуға күрә лә ул минең һаулыҡты ла баш ҡағып ҡына алды ла һул ҡулы менән генә эргәләге буш ултырғысҡа күрһәтте.

Ярай, мәйтәм, хәл юҡ, бер килгәс, көтәбеҙ инде. Йәйлап ҡына бүлмәгә күҙ йүгертеп сығам. Ике мөйөштә ыҡсым ғына ике өҫтәл ултыра. Уларҙың эргәләрендә икешәр ултырғыс урын алған. Күпте күргән, шуға күрә бер аҙ ҡыйшая төшкән шкаф стенаға һыйынған. Дөрөҫөрәге, һөйәнгән. Ҡолап китһәм, бәлки, тотоноп өлгөрөрмөн, тигәндәй, бер яҡ ишеге асыла төшкән. Ҡағыҙфәләндәрҙе иҫәпкә алмағанда, шунан башҡа артыҡ нәмә юҡ был бүлмәлә.

Ипләп кенә Самат ағайҙың яҙғанына күҙ һалам. Хаттар өҫтөндә күҙәтеү, тигән мәғлүмәтте әҙерләп ултыра икән ул. Алды тулы конверт. Өҫтәл тулы ауыл хәбәрселәре яҙмалары. Шул ауылда шул сара үтте, уның тураһында ауыл хәбәрсеһе ошолай яҙҙы, фәлән хәбәрсе бик өмөтлө, төгән авторҙың мәҡәләһе уҡымышлы, фәләндең шиғыры бик уңышлы, ҡыҫҡаһы, яҙышып тороғоҙ, тигән бик сетерекле мәсьәләне хәл итеп ултыра Самат ағай.

Нимәһе менән ул сетерекле, тип һорай ҡуйыр кемдер. Был хәлде мин ошолай аңлатыр инем. Бына, әйтәйек, ҡуян тураһында мәҡәлә яҙҙың икән, тей. Был осраҡта яҙыуы ла рәхәт. Аҙаҡтан да этем рәхәте. Сөнки ҡуян, нишләп минең турала алдап яҙҙың, тип һине эҙләп йөрөмәй. Ә кеше тураһында яҙһаң... Ваҡыты менән ҡуян һымаҡ үҙеңә ҡасып йөрөргә тура килә. Ыстырам, шул шуның тураһында шулайтып яҙған бит әле, минән килеп һорашһа, ней була, исмаһам, дөрөҫөн һөйләп бирер инем, тигән һүҙҙәр йыш яңғырап ҡуя бит ауыл араһында. Бына ошоноһо менән сетерекле ул кеше тураһында гәзит биттәренә яҙыу эше.

Бына әле Самат ағай әллә нисәмә кеше тураһында яҙып ултыра. Уға һәр хәбәрсене онотмаҫ кәрәк. Һәр береһенә йылы һүҙ табыр кәрәк. Һәр береһен дәртләндереп ебәрер кәрәк. Ҡайһы берҙәрен, бәлки, бер аҙ тәнҡитләп алырға ла кәрәктер. Ҡыҫҡаһы, кәрәк нәмәләр бик күп кәрәк. Шул мәл Самат ағайҙың яҙғанына ҡарап, бер аҙ аптырап ҡуям. Сөнки ул бер хәбәрсенең исем-шәрифен бейек итеп баш хәрефтәр менән яҙып ҡуйҙы! Бер аҙ ҡарап ултырғандан һуң ҡәләме менән һәр хәрефте эргәләтеп йөрөтөп ҡарайтып сыҡты. Хәҙер был хәбәрсенең исем-шәрифе башҡаларҙан күпкә айырылып тора ине. Миңә ҡалһа, һеҙ кем дә мин кем, тигәндәй, күкрәктәрен күпкә киреп ебәргәйне был исем-шәриф.

Нишләп улайтты икән Самат ағай? Тегеләй уйлап ҡараным, былай фараз итеп ҡараным. Әммә барыбер баш етмәне. Сыҙаманым. Аҙаҡ барыбер һораным был турала Самат ағайҙан. Миңә бер аҙ ҡарап ултырғандан һуң ул ошолай аңлатты был хәлде.

- Был хәбәрсе бик үҙенсәлекле яҙа. Бер нәмә тураһында яҙа башлай. Уртаһында икенсе хәбәргә күсеп китә. Хәбәренең аҙағын бөтөнләй башҡа нәмә менән тамамлап ҡуя. Һөйләменең ней башы, ней уртаһы, ней аҙағы юҡ. Шуныһы насар, уның мәҡәләһендә баш хәреф тә, өтөр ҙә, нөктә лә юҡ. Шуға уның яҙғандарын рәткә-һапҡа килтереп булмай. Исмаһам, баҫырлыҡ берәй нәмә әтмәлләп тә булмай. Өмә тураһында башланған хәбәр тора-бара йә балыҡ тотоуға, йә бесән сабыуға, йә күршеһенең һәйбәт булыуына, йә һабантуй ярышына, йә атының шәп сабыуына, йә һунар мажараһына һәм башҡаһына, һәм башҡаһына күсә лә китә. Уның ҡарауы, йыш яҙа. Аҙна һайын яҙа был хәбәрсе. Бер килгәнендә үҙенән ошолай һорай ҡуйҙым.

- Ә нишләп һин улай йыш һәм күп итеп яҙаһың?

Уның яуабы мине бер аҙ аптырауға һалды:

- "Исем-шәрифемде гәзит битендә күргем килә!" тимәһенме был. Бына шундай баш ҡатырғыс автор инде ул...

Беҙ бер аҙға тын ҡалдыҡ. Шунан Самат ағай әйтеп ҡуйҙы.

- Бына хәҙер күңеле булғансы ҡараһын әйҙә исем-шәрифенә!

Ошонан һуң күпмелер ваҡыт үтте. Теге гәзит донъя күрҙе. Бер барғанымда Самат ағай мине көлөп ҡаршы алды.

- Теге хәбәрсене әйтәм, ташланы бит хәҙер яҙыуын!

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙОҠЛАЙ АЛМАҺАҢ...

■ Йоҡоһоҙлоҡ менән нисек көрәшергә белмәйһегеҙме? Ғалимдар әйтеүенсә, тиҙ генә йоҡлап китергә бесәй үләне төнәтмәһе (настойка валерианы) ярҙам итәсәк. Бының өсөн уны эсергә түгел, ә еҫкәргә кәрәк. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, был осраҡта ул егерме тапҡырға тиҙерәк һәм яҡшыраҡ тәьҫир итә. Шулай итеп, әгәр ҙә йоҡлай алмайынса йонсоһағыҙ, йоҡларға ятыр алдынан бесәй үләне төнәтмәһе еҫкәгеҙ. Тын алыу тәрән түгел, әммә яй булһын. Артыҡ тырышып ташларға ла ярамай, был осраҡта башығыҙ ауыртасаҡ. Бындай терапияны 4 айға тиклем дауам итергә була. Бер айҙан һуң үҙегеҙҙә ыңғай яҡҡа үҙгәрештәр тоясаҡһығыҙ, йоҡоғоҙ ғына түгел, йөрәк эшмәкәрлеге яҡшырасаҡ, ҡан баҫымы яйланасаҡ.

■ Ҡыҙҙырылған майҙа әҙерләнгән ризыҡтарҙы, шул иҫәптән, фри картуфы, чипсы, ҡыҙҙырылған тауыҡты йыш ашау һәр кешенең, бигерәк тә ир-егеттәрҙең сәләмәтлегенә кире йоғонто яһай. Тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, аҙнаһына бер тапҡыр ғына бындай аҙыҡ ашаған ир-егеттәрҙә простата яман шеше хәүефе 30-37 процентҡа күтәрелә. Ғалимдар әйтеүенсә, ҡайнаған майҙа әҙерләнгән ризыҡ ашау һәм яман шеш барлыҡҡа килеү араһындағы бәйләнеш барлығын белдереүсе был беренсе асыш.

■ Һәр ваҡыт нимәнелер онотаһығыҙмы? Улай булһа, һеҙгә розмарин кәрәк. Психологтар розмариндың баш мейеһе эшмәкәрлегенә ыңғай тәьҫирен асыҡлаған. Һынауҙарҙа 66 кеше ҡатнашҡан. Уларҙың яртыһы розмарин еҫе аңҡып торған бүлмәгә, ҡалғандарын ябай бүлмәгә урынлаштырғандар. Бөтөн ҡатнашыусылар ҙа хәтер үҙенсәлектәрен өйрәнеүсе бер нисә тест яҙған. Һөҙөмтәлә, розмарин еҫен еҫкәүселәр тест һорауҙарын 60-75 процентҡа яҡшыраҡ үтәгән. Ғалимдар аңлатыуынса, розмаринда 1,8-цинеол тип аталған берләшмә бар. Ул хәтер нигеҙендә ятҡан химик системаға тәьҫир итә. Мәсьәләләрҙе тиҙерәк сискән кешеләрҙең ҡанында тап ошо берләшмәнең концентрацияһы күберәк булыуы асыҡланған да инде.

■ Йәмғиәттә ирҙең буйы ҡатыныныҡына ҡарағанда бейегерәк булырға тейеш, тигән ҡанун йәшәй. Был айырма күпме булырға тейеш - ғалимдар ошоно асыҡлап ҡараған. Ҡатын-ҡыҙҙар үҙҙәре иҫәпләүенсә, ир-егет яҡынса 20 сантиметрға бейек булырға тейеш. Ә көслө зат өсөн буйҙағы айырма 8 сантиметр булһа, шул еткән. 50 мең кешенән идеаль буй тураһында һорау алыу күрһәтеүенсә, ҡатын-ҡыҙҙар өсөн иң ҡулайлы буй тип - 173, ирҙәр өсөн 188 сантиметр иҫәпләнә. Статистика күрһәтеүенсә, күпселек парҙарҙа ирҙәр ҡатындарынан бейегерәк - 92,5 процент. 4 процент парҙарҙа ҡатыны бейегерәк, ә 3,5 процент осраҡта ир менән ҡатындың буйы бер тигеҙ. Әйткәндәй, яңыраҡ Гэллапа институты хеҙмәткәрҙәре асыҡлауынса, кешенең буйынан уның яҙмышы нисек булыры ла билдәләнә. Уртаса буйҙан (ирҙәр өсөн - 177, ҡатын-ҡыҙҙар өсөн 162,6 сантиметрҙан юғарыраҡ) бейегерәк булыусылар үҙҙәрен күпкә бәхетле, уңышлы һәм күңеллерәк тоя.

АФАРИН!

**Өфөлә лә балалар үҙ туған башҡорт телендә һөйләшә. Егерме-утыҙ йылдар самаһы элек был ғәҙәттән тыш хәл һымаҡ ҡабул ителһә, хәҙер иһә ауылдарҙа балаларҙың русса һупалауы ғәҙәти хәлгә әүерелде. Теге замандарҙа туған телде ауылдар һаҡлаһа, хәҙер был оло вазифаны ҡалалар үтәйме икән, тип тә аптырап уйланыла. Сөнки, мәҫәлән, Өфөләге башҡорт гимназиялары, лицейҙарында уҡыусылар, башҡорт балалар баҡсаларында тәрбиәләнеүселәр бөгөн туған телендә һөйләшә, аралаша, йырлай, төрлө башҡортса бәйге-конкурстарҙа ҡатнаша. Өфөнөң бер нисә башҡорт балалар баҡсаһы менән танышайыҡ.**

# ӨФӨБӨҘ БАЛАЛАРЫ...

## башҡортса һөйләшә, башҡортса аралаша

***Дим районындағы 75-се "Аҡбуҙат" башҡорт балалар баҡсаһы мөдире Гөлнара Фәниз ҡыҙы ТЛӘҮБАЕВА һөйләй:***

- Сабый туған телен ҡайҙа өйрәнә? Әлбиттә, иң тәүҙә әсәһенән, атаһынан, яҡындарынан. Ғаиләлә башҡорт телендә һөйләшәләр икән, балаға үҙ туған телендә аралашырға кәрәк тип өйрәтәләр икән, ул бер ваҡытта ла туған теленән баш тартмаясаҡ. Ә инде балалар баҡсаһында һәм мәктәптә лә туған телде, тарихыбыҙҙы, мәҙәниәтебеҙҙе, йолаларыбыҙҙы өйрәнеү өсөн шарттар тыуҙырыла икән, киләсәк быуындың телде һаҡлап ҡалыуына ышаныс бик ҙур.

Бына беҙҙең 75-се "Аҡбуҙат" башҡорт балалар баҡсаһында шундай ғаиләләрҙән сыҡҡан кескәйҙәр тәрбиәләнә. Ә беҙ ғаиләләрендә туған телгә, мәҙәниәткә һөйөү һалынған балаларҙы ошондай уҡ рухта тәрбиәләүҙе дауам итәбеҙ. Балалар баҡсаһы 1989 йылда асылған. Бөгөнгө көндә 13 төркөмдә 376 бала тәрбиәләнә. Төп маҡсаттарҙың береһе - кескәйҙәргә башҡорт телен һәм мәҙәниәтен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү. Мәктәпкәсә белем биреү - мәғариф системаһының беренсе баҫҡысы. Баланы шәхес итеп үҫтереүҙә мәктәпкәсә йәштәге осор бик әһәмиәтле. Беҙ эшмәкәрлегебеҙҙе балаларҙың телмәр үҫешенә булышлыҡ итеүсе, үҫтереүсе мөхит булдырыуға йүнәлттек. Театр гардеробтан башлана, тигәндәй, беҙҙең дә баҡсаға килеп инеү менән "Һаумыһығыҙ!" тип



сәләмләү һәм "Һау булығыҙ!" тип хушлашыу мөһим традиция һанала. Төркөмдәрҙең стеналарындағы һүрәттәр башҡорт халҡының милли колориты ҡулланып биҙәлгән. Уларҙы байҡап, фекер алышыуҙар ойошторабыҙ. Бынан тыш, һәр төркөм заманса интерактив таҡта һәм мультимедия проекторы, интерактив иҙән (умный пол), интерактив ҡом, "Алма" методик интерактив комплексы, планшеттар менән йыһазландырылған. Ә дәрестәргә килгәндә, күберәк ҡыҙыҡлы уйындар уйнау, әкиәт тыңлау, шиғыр, йырҙар өйрәнеү, уйынсыҡтар ярҙамында спектаклдәр сәхнәләштереү, диалогтар төҙөү, күрһәтмә материалдар ҡулланыу телде үҙләштереүҙә һиҙелерлек һөҙөмтәләр бирә. Ғөмүмән, дәрестәрҙе уйын формаһында үткәреү балаларҙа башҡорт теленә булған ҡыҙыҡһыныуҙы икеләтә арттыра. Уйындар шулай уҡ өндәрҙе, һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтергә ярҙам итә. Балалар уйын барышында һөйләмде тиҙерәк аңлай, яңы һүҙҙәр менән тиҙерәк таныша. Һәр баланың мөмкинлектәренә ышанырға, уның тәбиғәттән бирелгән һәләттәрен аса белергә кәрәк. Сөнки кескенә булһалар ҙа, уларҙың үҙ фекере, үҙ һүҙе, үҙ донъяһы бар. Баҡсала балаларҙың зиһенен киңәйтеү, эске донъяһын байытыу яғынан тәрбиәселәр ҡулдан килгәндең барыһын да эшләй. Уларҙы төрлө яҡлап үҫтереү йәһәтенән "Тылсымлы бармаҡтар", "Әкиәттә ҡунаҡта", "Шахмат" "Көрәш", бейеү һ.б түңәрәктәр ойошторолған. Балалар баҡсаһында кескәйҙәрҙең йырмоңға булған һәләтен асыуға, йор һүҙлелеген үҫтереүгә, сәхнәгә ылыҡтырыуға айырым иғтибар бүленә. Шуға күрә лә бындағы тәрбиәләнеүселәр төрлө кимәлдәге конкурстарҙа, бәйгеләрҙә уңышҡа өлгәшә. Баҡсаға йөрөгән балалар йыл һайын ҡалала үткәрелеп килгән "Илһам" шиғыр һөйләү, "Һаумы, һаумы, әкиәт", "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү конкурстарында әүҙем ҡатнашып, призлы урындар яулай.

Балалар баҡсаһында кескәйҙәр иплелеге, тыйнаҡлығы менән дә айырылып тора. Балаларҙың ата-әсәләре беҙҙең менән бер тулҡында тирбәлә, дөйөм эшебеҙҙең балаларға уҡытыу-тәрбиә эшен уңайлыраҡ, сифатлыраҡ итеү өсөн икәнен яҡшы аңлайҙар, шуға ла һәр башланғыстарыбыҙҙы күтәреп сығырға әҙер генә торалар, балалар баҡсаһында үткәрелгән бар сараларҙа ла актив ҡатнашалар. Ата-әсәләр менән берлектә "Шәжәрә", "Татыу ғаилә - ил күрке", "Һабантуй" байрамдары йыл да үткәрелеп килә. Был сараларҙың төп маҡсаты - сабыйҙарҙы башҡорт халҡының ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары менән таныштырыу, башҡорт халыҡ уйындарына, шаян йырҙарына, таҡмаҡтарына ҡарата ҡыҙыҡһыныу һәм һөйөү тойғоһо уятыу. Беҙҙең балаларҙың күбеһе, ете йәштәре тулғас, үҙебеҙҙең эргәлә генә урынлашҡан Рауил Бикбаев исемендәге 102-се Башҡорт гимназияһына уҡырға бара. Мәктәп менән күсәгилешлелек мәсьәләләре яҡшы ойошторолған. Уҡытыусылар һәм тәрбиәселәр бергә эшләй, балалар баҡсаһы менән башланғыс мәктәп араһында тығыҙ элемтә булдырылған.

Бала саҡ осоро - үҙе бер ҡабатланмаҫ мөғжизәле донъя. Үҙенсә матур, үҙенсә был серле донъяла тормошобыҙ дауамы - яңы шәхестәр тәрбиәләнә. Яҡшы тәрбиә үҙ шытымдарын бирер, киләсәктә "Аҡбуҙат"та киң ҡарашлы, ҡыйынлыҡтар алдында юғалып ҡалмаған, илебеҙ яҙмышын билдәләрҙәй, халҡыбыҙға хеҙмәт итерҙәй шәхестәр үҫеп сығыр, тип ышанабыҙ.

* * *

***Октябрь районының 308-се башҡорт балалар баҡсаһы мөдире, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре, Рәсәй Федерацияһының тәрбиә һәм мәғрифәтселек почетлы хеҙмәткәре Фәйрүзә Рәйес ҡыҙы МУСАБИРОВА һөйләй:***

- 308-се Башҡорт балалар баҡсаһында башҡорт телендә уҡытыу-тәрбиә эшен ойоштороу өсөн бөтә шарттар ҙа булдырылған. Бында 11 төркөмдә 292 бала тәрбиәләнә. Улар менән башҡорт телен яҡшы белгән 27 педагог-тәрбиәселәр, өлкән тәрбиәсе, музыка етәкселәре, физкультура етәксеһе, уҡытыусы-логопедтар, педагог-психолог эшләй. Уларҙың 20-һе - юғары категориялы, 4-әүһе - беренсе категориялы; 24-е - юғары белемле, 3-әүһе - махсус урта белемле.

Кескәйҙәр баҡсабыҙға килгән тәүге көндән башлап туған телле, этномәҙәни компонентлы мөхиткә сума. Был йүнәлештә балалар баҡсаһында Федераль дәүләт программаһына ярашлы ҡыҙыҡлы һәм һөҙөмтәле эш алымдары алгоритмы тупланған. Педагогтарҙың төп бурысы - башҡорт теленең бөтә өндәрен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү, һүҙлек байлығын үҫтереү, грамматик яҡтан дөрөҫ һөйләргә өйрәтеү, диалогик һәм монологик телмәрҙе камиллаштырыу, бәйләнешле телмәрҙе байытыу.

Һәр төркөмдә телмәр үҫтереүҙең бар бурыстарына ярашлы күргәҙмә, таратма материалдар, тематик альбомдар, бармаҡ уйындары, артикуляция, дөрөҫ тын алыу өсөн күнегеүҙәр, нәфис әҙәбиәт йыйынтыҡтары, һүҙле һәм дидактик уйындар картотекалары бар. Йәш үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, йәнһүрәттәр видеотекаһы, аудиоәкиәттәр, йырҙар яҙмалары, телмәр үҫтереү өсөн интерактив уйындар, хикәйәләр һөйләргә, шиғырҙар ятларға өйрәтеү өсөн схема-һүрәттәр тупланған.

Балаларҙы туған телдә ҡыҙыҡлы әңгәмәләргә ылыҡтырыу, ижад итеү һәм логик фекерләү һәләтен үҫтереү маҡсатында педагогтар төрлө ҡыҙыҡлы,

✓ ***"Туған теленә битараф булған әҙәм - ҡырағай... Ул үҙенең асылы менән ҡороҡҡослоҡҡа һәләтле, сөнки уның телгә булған ғәмһеҙлеге үҙ халҡының үткәненә, хәҙергеһенә һәм киләсәгенә булған вайымһыҙлыҡ менән аңлатыла".***






заманса эш алымдары ҡуллана. Бигерәк тә драматизация уйындары, мнемотаблицалар, схема-һүрәттәр, интерактив һәм дидактик уйындар, сюжетлы ролле уйындар ("Ат сабышы, "Һабантуй, "Башҡорт ашханаһы", "Умартасы", "Йәйләү", "Балаҫ һуғыу", "Кейеҙ баҫыу" һ.б.) менән таныштырыу бик отошло.

Баҡсабыҙҙа ойошторолған мини-музейҙа боронғо предметтар, шулай уҡ халҡыбыҙҙың бөйөк шәхестәре менән танышыу өсөн ҡиммәтле мәғлүмәттәр етерлек. Тәрбиәселәр бында балаларҙы йорт кәрәк-яраҡтары - һауыт-һаба, аш-һыу, боронғо эш ҡоралдары менән таныштыра. Кескәйҙәр өләсәйҙең серле һандығын, серле әкиәт йомғаҡтарын ҡулланып, халыҡ әкиәттәрен һөйләп, әүрәткестәр, бишек йырҙарын бик теләп башҡара. Музейыбыҙҙа "Йомаҡ ҡойошоу" һәм "Бармаҡ уйындары", "Тиҙәйткестәр һәм тел төҙәткестәр", "Өләсәйем әкиәттәре", "Халыҡ йырҙары" кисәләре үтә. Халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижады, фольклор текстары, халыҡ уйындары менән таныштырыу аша миҙгел байрамдарын үткәреү баҡсабыҙҙа изге йолаға әүерелде. Улар йыл миҙгелдәренә бәйләнеп үтә: "Сөмбөлә", "Ҡаҙ өмәһе", "Бәпес туйы", "Аулаҡ өй", "Ҡышҡы нардуған", "Ҡар һыуына барыу", "Кәкүк сәйе", "Ҡарға бутҡаһы", "Ҡымыҙ байрамы", "Һабантуй". Халҡыбыҙҙың онотолоп барған шөғөлдәренән "Тула баҫыу", "Балаҫ һуғыу", "Ҡымыҙ бешеү", "Солоҡсолоҡ", "Буҙа", "Ҡорот ҡайнатыу", "Йылҡысылыҡ" фольклор байрамдары бик күңелле үтә. Һәр йыл һайын шәжәрә байрамдарын да үткәрмәй ҡалмайбыҙ. Шәжәрә вәкилдәренең төрлө тарихи ваҡиғаларҙа ҡатнашыуы, яуланған уңыштары, күрһәткән хеҙмәттәре, һөнәрҙәре, белемдәре тураһында күргәҙмәләр ойоштораБыҙ. Әлбиттә, атай-әсәйҙәр ҙә был байрамдарҙан ситтә ҡалмай. Үҙҙәре үк балалар менән бергә сығыш яһай.

Баҡсабыҙҙа һәр йыл һайын "Әкиәт аҙналығы"н үткәреү күркәм традицияға әүерелгән. Әкиәттәрҙе сәхнәләштереү өсөн күп яҡлы эш алып барыла. Һәр төркөмдә яңғыҙ һөйләү, күмәк сәхнәлә уйнау өсөн шарттар булдырылған. Һөҙөмтәләре - район, ҡала, республика кимәлендә үткәрелгән сараларҙа юғары баһа, призлы урындар яулау. Баҡсабыҙ 2021 йылда "Тәрбиә һәм белем биреү башҡорт телендә алып барылған иң яҡшы мәктәпкәсә белем биреү учреждениһы" I төбәкара конкурсының абсолют еңеүсеһе булды. Кескәйҙәребеҙҙең район, ҡала, республика кимәлендә конкурстарҙа яулаған еңеүҙәре иһә шулай уҡ тәрбиәселәребеҙҙең эш һөҙөмтәһен иҫбатлаусы дәлил булып тора. Мәҫәлән, "Илһам" нәфис һүҙ оҫталары ҡала конкурсында (2024 йылда - 1-се, 3-сө урын); "Һаумы, һаумы, әкиәт" ҡала, республика конкурсында - (2024 йылда - 1-се, 2-се урын; 2025 йылда - гран-при, 1-се урын); 2024 йылда "Бишек йыры" ҡала конкурсында, "Полиглотик" тел ҡала олимпиадаһында - 1-се урын.

Балалар баҡсаһының тәрбиәләнеүсәләре мәктәпкә М.Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейына уҡырға бара. Балалар баҡсаһына йөрөүсе кескәйҙәр һәм мәктәптә уҡыусы балалар араһында тығыҙ бәйләнеш булдырылған, берҙәм саралар ойошторола.

* * *

***Совет районының 166-сы Башҡорт балалар баҡсаһы мөдире Ләйсән Сабир ҡыҙы РӘЖӘПОВА һөйләй:***

- Туған телебеҙ - беҙҙең данлы һәм шанлы тарихыбыҙ, ул - бөгөнгө көнөбөҙ, ул - беҙҙең яҡты киләсәгебеҙ. Үҙ теленә вайымһыҙ ҡараған шәхестәр хаҡында күренекле рус яҙыусыһы К. Паустовский: "Туған теленә битараф булған әҙәм - ҡырағай... Ул үҙенең асылы менән ҡороҡҡослоҡҡа һәләтле, сөнки уның телгә булған ғәмһеҙлеге үҙ халҡының үткәненә, хәҙергеһенә һәм киләсәгенә булған вайымһыҙлыҡ менән аңлатыла", - тип бик хаҡ һүҙҙәр әйткән.



Бала күңеле - аҡ ҡағыҙ, тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр, әгәр ҙә ошо саф, ҡарҙай ап-аҡ ҡағыҙ битенә нимәнелер дөрөҫ яҙмаһаң, киләсәктә был хатаны төҙәтеүе бик ауыр буласаҡ, сөнки кешене бәләкәй саҡтан уҡ шәхес итеп тәрбиәләргә кәрәк. Булған ауырлыҡтарҙы ваҡытында күреп, балаларҙың талантын төрлө яҡлап асырға тырышып, уларҙы әүҙем һәм талантлы, дәртле, дарманлы итеп үҫтереүгә беҙ бар көсөбөҙҙө һалырға тейешбеҙ.

Совет районының үҙәгендә урынлашҡан 166-сы Башҡорт балалар баҡсаһы педагогтары мәктәпкәсә йәштәге балаларға белем-тәрбиә биреү эштәрен башҡорт телендә алып бара. Башҡорт телендә халҡыбыҙҙың бөйөклөгө, уның күп быуаттарға һуҙылған тарихы, мәҙәниәте, быуындар бәйләнеше, үҙенсәлеге сағыла. Беренсенән, башҡорт теле - быуындан-быуынға күсеп килгән баһалап бөткөһөҙ бүләк. Икенсенән, башҡорт теле - дәүләт теле. Дәүләт теленең ҡәҙерен белеү һәм уны хөрмәт итеү - һәр башҡорттоң гражданлыҡ бурысы, сөнки туған тел кешелектең мөһим байлығы, уның мәғәнәле мираҫы. Балалар баҡсаһында кескәйҙәр туған тел аша мәҙәниәттең, тарихтың матди һәм рухи байлығына ылыға (нәфис әҙәбиәткә, фольклорға, һүрәтләү эшмәкәрлегенә һ.б.), уратып алған донъя тураһында белем ала. Һүҙ менән балалар үҙҙәренең фекерҙәрен, тойғоларын, тәьҫораттарын, ихтыяждарын, теләктәрен белдерәләр. Башҡорт теле, туған тел булараҡ, балаларға иркен фекер йөрөтөргә, һығымта яһарға, предметтар һәм күренештәр араһындағы ябай бәйләнештәрҙе үҙләштерергә ярҙам итә.

Балалар баҡсаһындағы эшмәкәрлек тәрбиәсенең профессиональ оҫталығына, балалар баҡсаһының үҫеш мөхитенә, төбәк үҙенсәлектәренә һәм балаларҙың үҫеш кимәленә иҫәп тотоп ойошторола. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ғаиләләрҙә тел, нәфис әҙәбиәт, фольклорҙы өйрәнеүгә бик аҙ ваҡыт бүленә. Балалар күбеһенсә телевизор, компьютер арттарында ултырып, телебеҙҙең матурлығын, төҙөклөгөн ишетеүҙән мәхрүм була. Ғөмүмән, башҡорт ғаиләләрендә тәрбиәләнгән балаларҙың телмәр үҫеше етерлек кимәлдә түгел. Был нимә менән бәйле һуң? Беренсенән, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, күп ата-әсәләр үҙҙәре туған телдә һөйләшмәйҙәр. Шуға күрә уларға балалар менән аралашыуы ауыр. Икенсенән, балаларҙың телмәрендә булған кәмселектәр телгә ҡарата йәмғиәттә булған кире факторҙарға ла бәйле: йәмғиәттә телмәр культураһы глобаль масштабта кәмей бара; ата-әсәләр һәм педагогтар балаларҙың телмәр үҫешенә етерлек иғтибар бүлмәй; ата-әсәләрҙең, педагогтар әҙәби башҡорт телендә таҙа һөйләшә белмәй.

Балаларҙың телмәрен уңышлы үҫтереү өсөн баланы һәр ваҡыт һөйләшергә, фекер йөрөтөргә өйрәтергә кәрәк. Быға заман талаптарына ярашлы яңы технологиялар ярҙамға килә. Беҙҙең балалар баҡсаһында дәрестәр күбеһенсә башҡорт телендә үткәрелә, төрлө милләт балалары йөрөһә лә, ҡыҙыҡһынып, башҡорт телен өйрәнәләр. Балалар баҡсаһынан сыҡҡанда, көндәлек һөйләшеүҙе һәйбәт үҙләштереп, аңлап ҡуллана башлайҙар.

Беҙ балалар баҡсаһына йөрөгән балаларҙың ата-әсәләре менән тығыҙ бәйләнеш булдырғанбыҙ, улар бөтә үткәрелгән сараларҙа ла әүҙем ҡатнаша, һәр ваҡытта ҡулдарынан килгән тиклем ярҙам итеп торалар һәм уҡытыу-тәрбиә эшен уңайлы, сифатлы итеү өсөн дөйөм эшебеҙҙең әһәмиәтен яҡшы аңлайҙар, һәр башланғысыбыҙҙы күтәреп алырға әҙер торалар. Ата-әсәләребеҙгә ҙур рәхмәтлебеҙ!

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Утыҙ алтынсы хат: "Сит илдәр тәбиғәте"

Әрмәнстан тәбиғәтенең бай булыуын шул да дәлилләй: ул картиналарҙа шул тиклем төрлө итеп һүрәтләнгән. Бер үк рәссам уны төрлө итеп күрә. Һәм шул уҡ ваҡыта барыбыҙ ҙа бергә: был Әрмәнстан, тип әйтәсәкбеҙ.

*Страна москательных пожаров*
*И мертвых гончарных равнин...*

О. Мандельштамдың ошо шиғыр юлдары хәтергә төшкәс, Валерий Брюсовтың да әрмәндәргә төбәлгән шиғырын телгә алмай булмай:

*Да! Вы поставлены на грани*
*Двух разных спорящих миров.*
*И в глубине родных преданий*
*Вам слышны отзвуки веков.*

*Все бури, все волненья мира,*
*Летя, касались вас крылом, -*
*И гром глухой походов Кира,*
*И Александра бранный гром...*

Халыҡтың бөйөклөгө донъя ваҡиғаларына мөнәсәбәтле булыуында. Бына ошо аяныслы ҡатнашлыҡта, ә мещандарса именлектә түгел әрмән халҡының рухы:

*Гранился он, как твердь алмаза,*
